***Бер аҡыл эйәһе шулай тигән: "Мин был донъяла берәүгә лә нәфрәт менән ҡарамайым. Сөнки нәфрәт иҙ тәүҙә үҙ хужаһын эстән кимерә. Нәфрәтләнеүсегә ҡарағыҙ: ул һәр ваҡыт ауырыу, бәхетһеҙ һәм асыулы. Ә уның нәфрәте төбәлгән кеше, ғәҙәттә, тормоштан йәм табып, һәр көнөнә ҡыуанып йәшәүсе. Ул һәр ваҡыт шат, уңышлы, бәхетле һәм һау-сләмәт. Башҡаларҙы күрә алмау, нәфрәтләнеү - ул бик мәшәҡәтле, файҙаһыҙ һәм мәғәнәһеҙ шөғөл. Нәфрәт йөрәк көсөңдө тартып ала һәм һине ауырыу яһай икән, ниңә уны үҙебеҙгә яҡын ебәрергә һуң?.."***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 ҒИНУАР (ҺЫУЫҒАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№3 (473)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ағинәйҙәр...** бер ҡорға тупланды



4

**Тубыҡланырҙай булырбыҙ ҙа,** илебеҙ генә булмаҫ...



6-7

**Яҙыусы менән баҡсасы бер-береһенә...** ҡабаттан йөҙ менән боролһон



8-9

**Балалар менән бергә** ҡышҡы уйындар уйнайыҡ!



12-13

14 ТВ-программа


ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# АУЫР ИШЕКТЕ КЕМ АСТЫ?

## Баш ҡаланың яңы башлығы һайланды



Бер ваҡыт бер батша үҙенең һарайындағыларға имтихан ойошторорға булған: улар дәүләт эшен башҡарырға, юғары вазифа биләргә лайыҡлымы, юҡмы? Барыһы ла бергә йыйылғас, батша вәзирҙәренә ҡарап, былай тигән:"Бер ауыр мәсьәләне хәл итергә кәрәк. Ҡайһығыҙ уны тиҙерәк хәл итә алыр икәнен белгем килә..." Шунан батша барыһын да һарайҙағы ҙур ишек янына алып килә һәм шулай ти: "Бына был минең һарайымдағы иң ауыр һәм иң ҙур ишек. Уны кем аса алыр?" Вәзирҙәрҙең кемелер ишек эргәһенә яҡын килеп тә тормай, батшаның шундай имтихан ойоштороуына ризаһыҙлыҡ белдереп, баш сайҡап ҡына ҡуя. Кемелер уны асып булмауға төрлө сәбәп эҙләй. Өсөнсөләре ишектең йоҙағын әйләндереп-әйләндереп тикшереп ҡарай. Шунан барыһы ла, был ишекте асып булмаясаҡ, тигән һығымта яһай һәм боролоп китә. Тик бер вәзир генә ишек янында ҡала, йоҙаҡты тотоп ҡарай ҙа, уны ҡапыл тарта. Йоҙаҡ асыла! Был вәзир йоҙаҡ асылһын өсөн бер аҙ ғына көс һалырға кәрәклеген, тормошта кеше асып булмаҫтай йоҙаҡтар юҡ икәнен яҡшы белгән булған, күрәһең...

Был риүәйәт ошо көндәрҙә булып үткән бер ваҡиғаға - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы вазифаһына дәғүә итеүселәр араһында булған имтиханға ауаздаш һымаҡ. Беләһегеҙҙер, был вазифаға конкурс ойошторолоп, туғыҙ кеше дәғүә иткәйне. Кандидаттарҙың үҙ-үҙен тотошо тап ошо риүәйәттәгесәрәк килеп сыҡты. Кемдәрелер үҙенең көс етмәҫтәй эшкә тотонғанын аңлап, сигенде, әммә үҙенең сигенеүенә төрлө һылтауҙар эҙләп, кемдәрҙелер ниммәләләр ғәйепләп маташты. Бер кандидат үҙенән лайыҡлыраҡ, үҙенән көслөрәк кандидат барлығын танып, үҙенең кандидатураһын ҡарауҙан үҙе баш тартты. Ҡыҫҡаһы, өс кандидат ҡына имтиханды тапшыра алды. Өфө ҡала округы Советы ултырышында ошо өс кандидаттың береһе Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы итеп һайлап алынырға тейеш ине. Депутаттар баш ҡаланың иң ауыр мәсьәләләрен дә сисә алырҙай, быны ошоға тиклем дә үҙ эше, тәжрибәһе, һәләтлеге менән иҫбатлаған кешене - Ирек Ишмөхәмәт улы Ялаловты һайланы.

Ултырышта ҡатнашыусы Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Ирек Ялаловтың Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы итеп һайланыуын хупланы. Республика Президенты, Ирек Ялаловтың ҡала мэры итеп һайланыуы - власть алмашыныуы ғына түгел, ә ниндәйҙер кимәлдә күсәгилешлелек тә, тип билдәләне. Ирек Ялалов - ҡала башлығының беренсе урынбаҫары, бынан һуң йыл дауамында республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры булып эшләне. Рөстәм Хәмитов Ирек Ялаловтың был вазифаһындағы эшмәкәрлегенән дә ҡәнәғәт булыуын билдәләне. Өфө ҡалаһы һәм Башҡортостан көҙгө-ҡышҡы йылытыу осорона әҙерлек, ремонт эштәре, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты яңыртыу буйынса дөйөм алғанда алдынғылар рәтендә булған, төбәктә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә яңы проекттар тормошҡа ашырылған. "Ҡала мэры вазифаһында ышаныслы, көслө, хужасыл, ҡала хужалығы менән идара итә алырлыҡ, ҡала халҡы, ҡала округы депутаттары, предприятие етәкселәре менән яҡшы мөнәсәбәт булдырырға әҙер етәксене күрергә теләгәйнем. Был эш өсөн, әлбиттә, әҙерлекле, тормош һәм кәрәкле эш тәжрибәһе булған кеше кәрәк ине", - тине Рөстәм Хәмитов.

Һәр кем үҙ урынында, үҙе белгән эште эшләргә тейеш шул. "Ҡайһы бер кандидаттарҙың гражданлыҡ пафосы көслө булды, - тигәйне кандидаттарҙан имтихан алыу буйынса Эксперт комиссияһы рәйесе Сергей Лаврентьев.- Әммә пафос көсө менән генә муниципаль идарала бер эш тә ҡыйратып булмай..." Ә шулай ҙа имтихан, конкурс - яҡшы һынау. Һәр хәлдә, "ауыр ишектәрҙе" кем аса ала икәнлеген һынай торған бер сара бит инде ул.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн беҙ илебеҙҙең ижтимағи королошон да, депутаттар һәм чиновниктар эшмәкәрлеген дә -барыһын да инҡар итәбеҙ, тәнҡитләйбеҙ. Йәшәү өсөн ҡайһы "һуҡмаҡтан" атларға һуң беҙгә? Ҡайҙа ул дөрөҫ йүнәлеш?

***Илдар ЗӨЛҠӘРНӘЕВ, иҡтисад фәндәре докторы:*** Ҡайһы берәүҙәр әйтеүенсә, халыҡ менталитеты Рәсәйҙә капитализм төҙөргә мөмкинлек бирмәйәсәк. Рәсәй халҡына ирекле социализм хас. Минеңсә, Рәсәй өсөн Ҡытай моделе яраҡлы. Әгәр ҙә 80-се йылдар аҙағына кире ҡайта алһаҡ, мин тап ошо моделде, йәғни сәйәси королошто үҙгәртмәйенсә, иҡтисадты модернизациялауҙы яҡлап сығыр инем. Ҡытай үҙ моделенә иҡтисади йәһәттән тулыһынса либераль мөнәсәбәттә булып, сәйәси яҡтан идара итеү тотҡаһын һаҡлап ҡалды. Беҙ әле ҡытайса иҡтисади моделде үҙебеҙҙә тулыһынса тормошҡа ашыра алмаясаҡбыҙ, әммә уның ҡайһы бер элементтарын әле лә ҡуллана алыр инек. Һуңғы осорҙа һәр өлкәлә "модернизация" һүҙе осрай. Был һүҙ нигеҙендә "заманса" тигән төшөнсә ята, йәғни заманға яраҡлаштырыу. Кешелек алға бара һәм бөгөн ул кисәгенән, ә иртәгә бөгөнгөнән айырылып торасаҡ. Шуға ла заман менән бергә атлау мөһим. РФ Президенты модернизация тураһында һүҙ ҡуҙғата икән, тимәк, ул сәнәғәттәге технологияларҙы ғына түгел, күберәк йәмғиәттәге үҙгәрештәр, гражданлыҡ йәмғиәте мәсьәләләрен күҙҙә тота. Әгәр ҙә беҙ йәмғиәтте модернизациялап, гражданлыҡ институттары индереп, әлеге сәйәси көстәр араһында ярыш ойоштороһаҡ, төрлө ҡараштарға толерантлыраҡ, түҙемлерәк булһаҡ, ул саҡта яңы идеялар мотлаҡ тыуасаҡ һәм сәнәғәт үҙенән-үҙе тәбиғи рәүештә модернизацияланасаҡ. Ижтимағи королошобоҙҙоң алға барыу юлын мин бына шунда күрәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

✓ *Тәбиғи ресурстар төпһөҙ күл дә түгел, улар йылдан-йыл кәмей, еребеҙ ярлылана бара. Етештереү предприятиелары булдырыу, халыҡты дәррәү эшкә йәлеп итеү генә ҡотҡарасаҡ хәлде.*



"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# РУХИ ҺЫУҺЫНЫМДЫ... гәзитебеҙ менән ҡандырам

**Һәр гәзиттең, күктәге иҫәпһеҙ-һанһыҙ йондоҙҙар кеүек, сағыуыраҡ балҡырға тырышыуы, йәшәргә, күберәк уҡыусылар йәлеп итергә тырышыуы ғәҙәти хәл. Нәшер ителеүенә ун ғына йыл булыуына ҡарамаҫтан, "Киске Өфө" гәзите милләттәштәребеҙҙең рухи ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү йүнәлешендә эшләп, тиҙ арала абруй яулаunion.**

Минең үҙемә, мәҫәлән, йәшенә лә, ҡартына ла берҙәй фәһемле тормош һабаҡтары, тәрбиә темаһына ҡағылған яҙмалар оҡшай. Мәрйәм Бураҡаеваның фәһемле мәҡәләләренән башлана улар, хәҙер инде уның йәнәшендә башҡа авторҙар ҙа күренә башланы. "Монолог", "Диалог" рубрикаларындағы әңгәмәлә ҡатнашыусылар ҙа ошо уҡ темаға фәһемле фекерҙәре менән уртаҡлаша. Ғөмүмән, ҡиммәтле фекерҙәр һандығы инде ул гәзитебеҙ.

Кеше уҡыуҙан, фекерләүҙән туҡтаһа, йәшәүҙән туҡтай, бары ағым ыңғайына ғына йөҙөп тереклек итә. Быны булдырмаҫ өсөн көн дә үҙ өҫтөндә эшләргә, камиллашырға тейешһең. Ошоға әйҙәгән мәҡәләләр күңелемә яҡын. Дингә ҡағылышлы һүҙ сыҡһа, балалар йығылып ятып тыңларға әҙер, тип әйткәйне бер уҡытыусы. Тик ата-әсәләрҙең ҡайһы берҙәре дини тәрбиәгә, ниңәлер, ҡаршы. "Киске Өфө"ләге дин, иман тураһында баҫылған мәҡәләләрҙе уҡыһалар, бәлки, күбеһе үҙ ҡарашын үҙгәртер ине лә, ундай ата-әсә гәзит тә уҡымай шул инде.

"Киске Өфө" киләсәккә өмөт, йәшәйешкә ынтылыш, ыңғай энергия тарата. Халыҡҡа таянған - таймаҫ, тиҙәр. Был "Киске Өфө" хаҡында әйтелгән кеүек. Шуға ул үҙе лә уҡыусыларына таяныс булып тора. Гәзитте мин сыға башлағандан бирле алдырам. Тәүге һандары баҫылғанда ауылда бер үҙем генә яҙҙыра инем уны. Хәҙер, Аллаға шөкөр, уҡыусылары күбәйә бара. "Киске Өфө" гәзитенә теләгем бер: уҡыусылары артһын. Уның уҡыусылары артһа, арабыҙҙа иманлы һәм аңлы кешеләр артыуы күрһәткесе лә булыр ине был.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы Сораман ауылы**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Бөгөн беҙ илебеҙҙең ижтимағи королошон да, депутаттар һәм чиновниктар эшмәкәрлеген дә -барыһын да инкар итәбеҙ, тәнкитләйбеҙ. Йәшәү өсөн кайһы "һукмактан" атларға һуң беҙгә? Кайҙа ул дөрөҫ йүнәлеш?*

(Башы 1-се биттә).

***Зәки ХАММАТОВ, иҡтисад фәндәре докторы:*** Ҡатмарлы, сетерекле ваҡыттарҙа йәшәйбеҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, халыҡ ҡурсалауһыҙ, яҡлаусыһыҙ тороп ҡалды. Ул тулыһынса яҙмыш ҡарамағына тапшырылды. Халыҡ яҡлаусыһыҙ, тигәндән, мин нимәне күҙҙә тотам һуң? Әлбиттә, халыҡтың эш менән мәшғүллеген, сөнки бөтә матди һәм рухи тарҡалыш эшһеҙлектән башлана ла инде. Бындай хәлдә халыҡ, әлбиттә, бер кемгә һәм бер нәмәгә лә ышанмай, бигерәк тә һайлау алды вәғәҙәләре ошондай шарттарҙа көлкө лә, ҡыҙғаныс та булып күренә. Әлегә бит "изге ниәттәр" һүҙҙән ары китә алмай - шуныһы ҡыҙғаныс. Үҙәк, өлкә, республика даирәһендәге етәкселек булһынмы, урындағыларымы - фәҡәт һүҙ һөйләүҙән бушана алмайҙар. Ә бит ҡоро һүҙ һәм вәғәҙәләр менән халыҡ туҡ булмай. Әлеге изге ниәттәрҙе һүҙҙә түгел, ғәмәлдә тормошҡа ашырыу кәрәк. Уйлап ҡараһаң, күп тә кәрәкмәй кеүек: кешегә эш кенә булһын, ҡалғанын ул үҙе яулар. Эше булһа, ашы ла булыр, ғаиләһен дә аҫырар, тормошо ла йәйланыр - был хәҡиҡәт. Тимәк, беҙҙең етәкселәргә буш һүҙ һөйләүҙән туҡтап, кешегә эш урындары булдырыу, заманса предприятиелар асыу, бөлгөнлөккә төшөп, тонсоғоп ҡалғандарына ярҙам итеп, аяҡҡа баҫтырыу - бына шундай аныҡ эштәргә тотонорға кәрәк.

Иҡтисадсы булараҡ та, заманында совхоз директоры булып эшләп, хужалыҡ эштәрендә, республика Юғары Советында, Президент хакимиәтендә дәүләт хеҙмәте өлкәһендә ярайһы ғына эш тәжрибәһе туплаған кеше булараҡ та, шулай тип әйтер инем: кисекмәҫтән халыҡ мәнфәғәтендә аныҡ эштәргә тотоноу фарыз. Әҙер тәбиғи сеймал - нефть менән газ һатып ятыу - ул эш түгел. Тәбиғи ресурстар төпһөҙ күл дә түгел, улар йылдан-йыл кәмей, еребеҙ ярлылана бара. Етештереү предприятиелары булдырыу, халыҡты дәррәү эшкә йәлеп итеү генә ҡотҡарасаҡ хәлде.

Һүҙ һөйләүҙән эшкә күсеп, беҙ үҙебеҙ, Көньяҡ Урал Аҡһаҡалдар советы, мәҫәлән, Сибай ҡалаһында машиналар төҙөү заводы асырыуҙы хәстәрләүҙе, юллауҙы бурысыбыҙ итеп алдыҡ, сөнки Сибайҙы ҡала итеп тотҡан һәм элегерәк гөрләп эшләп торған Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинаты көрсөккә килеп терәлде. Күпләп эшселәр ҡыҫҡартылыуға дусар ителде, шулай итеп тотош эшһеҙҙәр армияһы барлыҡҡа килде. Улар хәҙер эш таба алмай аңҡы-тиңке килә, ситкә, Себергә лә сығып китеп ҡарайҙар - кире ҡайтып киләләр, сөнки унда ла хәҙер берәүҙе лә ҡолас йәйеп көтөп тормайҙар. Әлегесә, машиналар төҙөү предприятиеһы асырғанда, меңәрләгән кешегә эш урыны булдырылыр ине. Машиналар төҙөү, тигәндән, уның 200-ләп кенә тармағы бар. Шуның береһе - подшипниктар етештереү линияһы асыу ҙа беҙгә баҙарға сығыу мөмкинлеге бирәсәк бит! Сөнки бындай предприятие Мәскәүҙән башҡа бер ерҙә лә юҡ. Төп мәсьәләгә ҡарашым шул: йәшәү өсөн кешегә хеҙмәт, эш кәрәк. Шул осраҡта ғына етәкселәр халыҡ ышанысына өмөт бағлай ала.

***Әсхәл ӘХМӘТКУЖИН, шағир:*** Үҙ ғүмеремдә Сталиндан башлап бөтә ил хакимдарын күрҙем. Шулар араһынан Хрущев менән Ельцин Рәсәй өсөн емергес көс, бутап, ҡыйратып, илде көрсөккә терәүселәр булып тороп ҡалдылар тарихта. Брежнев заманында ил тыныс булһа ла халыҡ насар йәшәне, таңғы 5-тән тороп "мөнйөлгән" һөйәккә (рагу) сиратҡа баҫалар ине. Шулай ҙа халыҡ ул саҡ яҡшыға өмөт менән йәшәне. Ельцин менән Горбачев үҙара власть бүлешә алмай, донъя кимәлендә ҡөҙрәтле держава булған СССР-ҙы юҡҡа сығарҙылар. Шул мәлдән халыҡ өмөтһөҙлөккә бирелде. Ошо йәһәттән үткән быуат баштарында йәшәгән мәшһүр реформатор Петр Столыпиндың һүҙҙәре иҫкә төшә. Ул донъя бутаусыларға, Рәсәйҙе ҡаҡшатырға тырышыусыларға, революционерҙар һәм террорсыларға былай тип әйтә: "Һеҙгә бөйөк тетрәнеүҙәр кәрәк, ә беҙгә ҡөҙрәтле, ҡеүәтле Рәсәй кәрәк". Уның ошо һүҙҙәре бөгөнгө көндә лә бик актуаль яңғырай. Жириновский, Зюганов, Явлинский кеүек сәйәсмәндәр Президент булыр өсөн нимәләр генә ҡыланмай! Донъя бутап, халыҡты урамға сығарып, боларыштар ойошторорға, йөҙрөҡ болғап, яҡшы тормош дауларға ҡоторталар. Шул уҡ ваҡытта улар яҡшы тормошто үҙ ҡулдарың менән эшләп алыу кәрәклеген, яҡшы тормошто "һә" тигәнсе килтереп биреүсе яҡшы батшаларҙың әкиәттә генә булыуын оноталар. Ошондай шарттарҙа ил менән етәкселек итеүҙә байтаҡ тәжрибә туплаған В. Путиндың тотороҡло тормошҡа, Рәсәйҙең матур үҫешенә йөҙ тотоуы, әкренләп булһа ла Рәсәйҙе алдынғы державалар рәтенә сығарырға тырышыуы минең күңелемә яҡын. Яйлап тотороҡлолоҡҡа өлгәшеүгә өмөт бар. Ләкин иң мөһим мәсьәләләрҙең береһен кисекмәҫтән хәл итеү кәрәк: халыҡҡа эш урындары булдырылһын ине. Ә ауылдарҙа эшләгән, уңған кеше бер ҙә насар йәшәмәй. Мәҫәлән, беҙҙең Аҫҡарҙа уңған эшҡыуарҙар күп: газын да үткәрәләр, мебель дә яһайҙар, йылҡы, башҡа мал-тыуар ҙа үрсетәләр... Ҡайһы бер эксперттар әйткәненсә, беҙҙең Рәсәй иленә Ҡытай моделе кәрәк түгел, шул уҡ ваҡытта Көнбайыш һәм Европа өлгөләре лә беҙгә ят. Рәсәйҙең үҙенә генә хас менталитеты бар. Сит илдән әҙер моделде күсереп алыу йүнле һөҙөмтә бирмәйәсәк. Беҙҙең халыҡ түҙемле, сабыр, фәҡәт уға донъя көтөү, ғаиләһен аҫырау, балалар үҫтереү һәм был тормоштоң матурлығын күреп, аңлап йәшәү өсөн мөмкинлектәр булдырылыуы шарт.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

*ИҒТИБАР!*

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзитебеҙҙең яңы йылдағы өсөнсө һанын ҡулығыҙға алдығыҙ бына. Әммә эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Бик нык өҙгөләнеүселәрен дә, әллә ни иҫе китмәгәндәрен дә иҫкәртегеҙсе: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, марттан өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө".**

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына тағы шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡтар менән 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн яҙылып буласаҡ.

**Әйткәндәй**, почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мәскәүҙә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Газпром" асыҡ акционерҙар йәмғиәте идараһы рәйесе Алексей Миллер менән осрашты. Осрашыуҙа Башҡортостанды газ менән тәьмин итеү, республикала "Газпром нефтехим Салауат" предприятиеһы нигеҙендә технопарк менән Бөтә Рәсәй газ химияһы үҙәген ойоштороу, тораҡ пункттарға газ үткәреү, компанияның спорт сараларында ҡатнашыуы, социаль яуаплылығы мәсьәләләре тикшерелде. Президент әйтеүенсә, ауылдарға газ үткәреүҙе дауам итеү өсөн "Газпром" быйыл Башҡортостанға айырыуса ҙур сумма - 300 миллион һум бүләсәк.

✓Федерация Советы рәйесе Валентина Матвиенко күрһәтмәһе менән сенатор Рудик Исҡужин Рәсәй Федераль Йыйылышы юғары палатаһының РФ Үҙәк һайлау комиссияһындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле итеп тәғәйенләнде. Белеүегеҙсә, Федерация Советында Рудик Исҡужин, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай вәкиле булараҡ, республика мәнфәғәттәрен яҡлай, Оборона һәм хәүефһеҙлек комитеты рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара.

✓Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Владимир Путин Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән эш осрашыуы үткәрҙе. Унда йыл эсендә республиканың социаль-иҡтисади үҫеш һөҙөмтәләре тикшерелде, тип хәбәр итә Башҡортостан Президентының матбуғат хеҙмәте. Башҡортостан Президенты Владимир Путинды төп эш һөҙөмтәләре менән таныштырҙы һәм төбәк продукты буйынса республиканың 110 процентҡа сығыуын билдәләне, был Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестән юғарыраҡ - яҡынса 940-950 миллиард һум.

✓2012 йылдың 4 мартында Башҡортостанда Рәсәй Федерацияһы Президенты һайлауҙары менән бергә муниципаль һайлауҙар үтәсәк. Республиканың һигеҙ ҡала округында - Өфөлә, Ағиҙелдә, Күмертау, Нефтекама, Октябрьский, Салауат, Сибай һәм Стәрлетамаҡта урындағы үҙидараның вәкиллекле органдары - ҡала Советтарына һайлауҙар үтәсәк. Дөйөм алғанда 192 мандат алмаштырыласаҡ. Ошо уҡ көндө туғыҙ ҡала биләмәһе Советына (165 бер мандатлы округ буйынса) һәм 30 ауыл биләмәһе Советына (294 округ буйынса) һайлауҙар үтәсәк. 60 округ буйынса ауыл биләмәләре Советына - өҫтәмә, ете округ буйынса ҡабаттан һайлауҙар үтәсәк. Дөйөм алғанда, муниципаль һайлауҙарҙа 721 депутат мандаты таратыласаҡ.

***✓ XIX быуатта бер кем дә бер кемгә лә эш урындары әҙерләп бирмәгән, колхоз-совхоздар ҙа, завод-фабрикалар ҙа булмаған. Тормош нисек кенә ауыр булмаһын, быуаттар буйына үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар бөтөнләй осрамаған.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ХӘҠИҠӘТ ЙӘН ҺАҠЛАР...

**"Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." әйтеме хаҡында һүҙ алып барғанда "XX быуат чумаһы" тип нарыҡланған суицид проблемаһын бер нисек тә урап үтә алмайбыҙ. Ошо афәт тураһында әсенешле уйланыуҙарым һөҙөмтәһе булараҡ "Тыштағы зыярат" тигән романым да яҙылды. Мин ул әҫәрҙе яҙғанда кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыуға алып килеүсе сәбәптәрҙе өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуйғайным. Үҙемсә был һорауға яуап та таптым кеүек. Әлбиттә, бәндәнең йән һаҡлар хәҡиҡәтте аңлап етмәүен дә суицидтың төп сәбәбе итеп танырға кәрәк.**



## Интихар: 21 сәбәп

Күренекле башҡорт яҙыусыһы Рамаҙан Өмөтбаев ғүмеренең һуңғы йылдарында беҙҙең милләттәге суицид проблемаһын өйрәнде. Уның әйтеүенсә, XIX быуатта хәҙерге Әбйәлил районы территорияһында бер генә кеше үҙ-үҙенә ҡул һалған. Ул да булһа, Магнитная станцияһынан Таңатарға (хәҙерге Асҡар) иҫерек килеш килгән урыҫ кешеһе булған. Шул уҡ ваҡытта XX быуаттың 80-се йылдарында Әбйәлил районында уртаса алғанда йылына 70-75 кеше үҙ-үҙенә ҡул һалып, уларҙың барыһы ла башҡорт милләтенән. Сәстәр үрә торорлоҡ мәғлүмәт. Беҙ, йылдан-йыл, быуаттан-быуатҡа кешелек алға бара, йәшәү шарттары яҡшыра, тип һөйләргә, цивилизация ҡаҙаныштары менән маҡтанырға яратабыҙ, баҡтиһәң, барыһы ла беҙ уйлағандың нәҡ киреһе икән.

Үҙ-үҙенә ҡул һалыу латинса - суицид, ғәрәпсә интихар тип атала. Ислам дине ҡанундары буйынса үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы, йыназаһын атҡарған хәлдә лә, башҡа мөъминдәр күмелгән зыяратҡа ерләргә рөхсәт ителмәй. Минең романдағы ваҡиғалар ҙа тап ошо сәбәпле ауылдағы руханиҙар менән атеист йәштәр араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтар юҫығында бара.

Ғалимдар кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыуға алып килеүсе 21 сәбәптең барлығын асыҡлаған:

-шәхси тормоштағы ауырлыҡтар: социаль шарттар, эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ, эскелек, уларҙы йырып сығыр ихтыяр, көс, сабырлыҡ булмауы;

-романтик йәки енси уңышһыҙлыҡ;

-бәхетһеҙ мөхәббәт;

-яҡындарҙың, туғандарҙың вафаты;

-бер мәртәбә үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләүсе ҡасан да булһа ниәтен бойомға ашыра;

-ҡурҡыу, кәмһетелеү;

-туҡмалыу, көсләнеү;

-үҙенде донъяла яңғыҙ итеп тойоу, башҡаларҙы аңламау;

-эштәге проблемалар, финанс проблемалары;

-аутинг, кешенең дөрөҫ булмаған енси ориентацияһы тураһында йәмғәтселектең белеүе;

-үҙ-үҙенде профессиональ, ижади яҡтан бойомға ашыра алмау;

-йәшәү мәғәнәһен юғалтыу;

-тормоштан арыу;

-һаулыҡ насарайыу, эвтаназия;

-дини фанатизмға бирелеү, секталар культы;

-социумды ҡабул итә алмау;

-хәрби шарттарҙа әсиргә төшмәҫ өсөн;

-хөкөм ҡарарынан ҡасыу;

-харакири;

-кемгәлер оҡшарға тырышыу;

-реинкарнацияға (яңынан тыуыуға) ышаныу.

## Тәҡдир үҙгәрмәй

Һуңғы ваҡытта суицидтың сәбәптәрен асыҡлауға, уларҙы бөтөрөүгә йүнәлтелгән төрлө кимәлдәге ғилми һәм рәсми кәңәшмәләрҙә күберәк социаль сәбәптәргә иғтибар йүнәлтелеп, бындай форумдар эш урындары булдырыу, иҡтисадты үҫтереү, инвесторҙар йәлеп итеү тураһындағы оперативкаларға әүерелә лә китә. Йәнәһе, фәлән фәлән районда, хакимиәттә шунсама эш урыны булдырыу һөҙөмтәһендә үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙың һаны ҡырҡа кәмене, унан тулһынса ҡотолор өсөн тағы ла шунсама эш урындары булдырырға кәрәк һ.б. Шулай уҡ суицидты тик эскелек менән генә бәйләргә тырышыу ҙа күп осраҡта аҡланыуға оҡшап китә. Әгәр ҙә беҙ әмәлһеҙлек ярына килеп терәлгән кешенең был юлдан сығыу сараһын спиртлы эсемлек ҡулланыуҙа таба тип ҡараһаҡ, эскелек был осраҡта суицидтан тайпылыу ҙа булыуы бар бит. Тайпылыу, әммә ваҡытлыса ғына. Сөнки эскелек, наркоманлыҡ, тәмәке тартыу кешене яйлап-яйлап үлемгә алып килеүсе суицидтың пассив төрө. Тимәк, эскелекте, наркоманлыҡты, тәмәке тартыуҙы юҡҡа сығарыу мәсьәләһе суицид мәсьәләһе кеүек етди ҡараштың талап итә.

Ә бит, Рамаҙан Өмөтбаев өйрәнгәнсә, XIX быуатта бер кем дә бер кемгә лә эш урындары әҙерләп бирмәгән, колхоз-совхоздар ҙа, завод-фабрикалар ҙа булмаған. Шул уҡ ваҡытта кешеләр ҙә эшһеҙ тормаған. Иң мөһиме, тормош нисек кенә ауыр булмаһын, быуаттар буйына үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар бөтөнләй осрамаған. Шуға күрә суицидтың иң төптә ятҡан сәбәптәре хаҡында тарихи юҫыҡта, тәрәнерәк төшөп уйланғанда, юғарыла килтерелгән 21 сәбәптең кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыуға алып килеүсе сәбәп түгел, ә һылтау, һөҙөмтә икәнлеген дә танырға тура килә. Романда төп фекеремде тап ошо рәүешле итеп үткәрәм дә инде. Сөнки илдең, милләттең, айырым кешенең тотҡан юлы, яҙмышы үҙгәргән хәлдә лә, тәҡдир үҙгәрешһеҙ көйө ҡала.

Әйтәйек, XX быуат башындағы башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидиҙең хыялдары тормошҡа ашып, Октябрь инҡилабы булмаһа, беҙ, моғайын, шәреҡтәге, Урта Азиялағы мосолман дәүләттәре һымаҡ, үҙебеҙҙең оло тарихи Башҡортостан территорияһында үҙебеҙҙең айырым дәүләттә йәшәгән булыр инек. Дингә лә мөнәсәбәтебеҙ элеккесә ҡалып, атеистик йәмғиәттең ни икәнен дә белмәҫ инек. Мотлаҡ рәүештә үҙебеҙҙең милли ғәскәребеҙ булып, еребеҙ байлығына яҫҡыныусыларға ҡаршы көрәшер ҙә инек. Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай, шулай булғас, ул яуҙарҙа күп кенә ир-азаматтар башын һалыр, ҡорбан булыр ине. Үҙеңде илең, ереӊ өсөн ҡорбан итеүгә тиң батырлыҡ та шул уҡ тәҡдир бит. Ә беҙҙең XX быуаттағы ҡотһоҙ һәм шөҡәтһеҙ атеистик ҡоролошта бындай батырлыҡты һәм фиҙаҡәрлекте бойомға ашырыу шарттары булдымы һуң? Тимәк, ошоғаса аңһыҙ үлем тип аталған суицидтың сәбәптәрен тап ошолай илдәрҙең, милләттәрҙең һәм кешеләрҙең яҙмышы үҙгәреүгә бәйләп кенә аңлатып була.

Юҡ, мин бында суицидты аҡламайым, бары тик аңларға һәм аңлатырға ғына тырышам. Әгәр ҙә илебеҙ, милләтебеҙ, кешеләр Хаҡ Тәғәлә яҙған тәҡдир буйынса йәшәгән булһа, суицидтың беҙ ни икәнен дә белмәгән булыр инек. Ә атеистик ысынбарлыҡта иһә тәҡдире буйынса батыр булыр кеше бахыр рәүешенсә үҙ-үҙен үлтерә. Минең фекер менән килешергә теләмәһәгеҙ, ана, ҡарағыҙ: дини ҡанундары, халҡының йолалары, традициялары буйынса йәшәгән мосолман дәүләттәрендә суицид бөтөнләй юҡ.

Ә бит әҙәм балаһының маңлайына тәҡдирен Хаҡ Тәғәлә яҙа. "Хаҡ"тың тамыры хәҡиҡәттә. Тимәк, унда хәҡиҡәт яҙыла. Хәҡиҡәттең йән һаҡлар асылы бына ҡайҙа...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар. Башы 2-се һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда алдағы муниципаль һайлауҙарға депутатлыҡҡа кандидаттар күрһәтеү тамамланды. Республикала 1920 кандидат теркәлгән. Шуларҙың 697-һе - үҙҙәрен үҙҙәре күрһәтеүселәр, ҡалғандары сәйәси фирҡәләр менән тәҡдим ителгәндәр. Муниципаль һайлауҙарҙа бөтә парламент партиялары ла ҡатнашырға йыйына. Депутат мандаттарына "Берҙәм Рәсәй"ҙән - 728, коммунистар партияһынан - 193, "Ғәҙел Рәсәй"ҙән - 172, Рәсәйҙең либераль-демократик партияһынан 130 кандидат дәғүә итә.

✓Өфөлә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Милли медицина палатаһы башлығы Леонид Рошаль менән осрашты. Леонид Рошаль медицина хеҙмәттәрен сифатлыраҡ итеүгә йүнәлтелгән норматив акттар әҙерләүҙә ҡатнаша алырлыҡ структура төҙөү яҡлы булыуын билдәләне. Профессор фекеренсә, Медицина палатаһы бындай структура ролен башҡара алыр ине. Рөстәм Хәмитов Леонид Рошальдың Башҡортостанда Төбәк медицина палатаһын булдырыу буйынса тәҡдимен хупланы.

✓Башҡортостан Республикаһында уҡытыусыларҙың уртаса эш хаҡы 2011 йылдың 1 декабренә тиклем айына 16455 һумға тиклем арттырылған. Киләһе йылға бюджетҡа 2 миллиард 34 миллион һум һалынған. Әлеге ваҡытта уртаса эш хаҡы 16800 һумға барып баҫа. Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Азамат Сәйфуллин һүҙҙәренсә, Өфө уҡытыусыһының уртаса айлыҡ эш хаҡы 17 мең һумдан ашыу тәшкил итә.

✓25 ғинуарҙа Өфөлә, Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте магазинында (Октябрь проспекты, 2) сәғәт 4-тән киске 6-ға тиклем билдәле яҙыусы, сәйәхәтсе Камил Йыһаншин менән осрашыу үткәрелә. Осрашыуҙа 2011 йылда яҙыусы тап ошо әҫәре өсөн Вячеслав Шишков исемендәге абруйлы бөтә Рәсәй әҙәби премияһына лайыҡ булған "Золото Алдана" китабының презентацияһы үткәреләсәк, йәнә автор әҫәрҙәренең яҙылыу тарихы, слайдтар ярҙамында сәйәхәттәре тураһында һөйләйәсәк.

✓Федераль миграция хеҙмәтенең БР буйынса идаралығында тәүлек әйләнәһенә автояуаплау режимында ышаныс телефоны эшләй: 8 (347) 250-53-15. Граждандар миграция хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре тарафынан яһалған ҡағиҙә боҙоуҙарға зарлана, үҙенең теләктәрен еткерә һәм ришүәтселек факттары йәки коррупцион енәйәт планлаштырылыуы тураһында хәбәр итә ала.

✓ *Һайлау алды штабы башлығы, режиссер Станислав Говорухин белдереүенсә, халыҡ фронты - ул тотош ил, "Әгәр һин ил президенты икәнһең, бер генә партияға йөҙ борорға, бер генә партияға йүнәлеш алырға ярамай".*



СӘЙӘСӘТ



# БАШЛАНДЫ!

**2011 йылдың 16 ноябренән Рәсәйҙә рәсми рәүештә президент һайлау кампанияһы старт алды. Дәүләт башлығын һайлауҙар быйыл 4 мартҡа тәғәйенләнгән.**

27 ноябрҙә "Берҙәм Рәсәй" съезында партия үҙенең кандидаты итеп Хөкүмәт Премьер-министры Владимир Путиндың кандидатураһын тәҡдим иткәйне. "Ғәҙел Рәсәй"ҙән был посҡа - Сергей Миронов, ЛДПР-ҙан - Владимир Жириновский, КПРФ-тан - Геннадий Зюганов дәғүә итә. Олигарх Михаил Прохоров та кәрәкле ике миллион ҡултамға йыйып, үҙ кандидатураһын теркәтеүгә өлгәшкән.

Ошо көндәрҙә президентлыҡҡа кандидат Владимир Путиндың интернет сайты эшләй башланы. www.putin2012.ru адресы буйынса теләгән бер кеше Премьер тураһында мәғлүмәт ала һәм үҙенең идеялары менән уртаҡлаша ала. Матур идеялар Путиндың һайлау алды программаһына инеүе лә ихтимал. Сөнки Хөкүмәт башлығы үҙенә ышаныс күрһәткән фирҡәнең ярҙамынан баш тартып, Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтына таянырға ҡарар иткән. Һайлау алды штабы башлығы, режиссер Станислав Говорухин белдереүенсә, "Берҙәм Рәсәй" партияһы - йәмғиәттең ҙур булмаған ҡатламын ғына тәшкил итһә, халыҡ фронты - ул тотош ил, "Әгәр һин ил президенты икәнһең, бер генә партияға йөҙ борорға, бер генә партияға йүнәлеш алырға ярамай".

Шулай уҡ путин2012.рф порталы ла эшләй башланы. Уның беренсе блогында 2012-2018 йылдарға программа проекты урынлаштырылған. Эске сәйәсәт, иҡтисад, армия, эш хаҡтары һәм пенсия түләүҙәре, социаль яҡлау һәм сәләмәтлек, мәғариф мәсьәләләренә етди иғтибар бирелгән был документта төп ҡиммәт булып кешенең үҫеше һәм уның һәләттәрен тормошҡа ашырыу өсөн шарттар тыуҙырыу тора. "Рәсәйҙә эшләгән кеше ярлы булмаясаҡ", - тиелә документта. Пенсияларҙың артыуы, ғаиләгә ярҙам итеү, балалар баҡсаларында урындар ҡытлығын бөтөрөү, дөйөм диспансерлаштырыу, Торлаҡ-коммуналь хужалығында тәртип урынлаштырыу - алға ҡуйылған бурыстарҙың бер нисәһе генә.

Аныҡлап әйткәндә, был һайлау алды кампанияһында Путиндың штабы агитацияһы бюджет өлкәһендә эшләүселәр, хәрбиҙәр, пенсионерҙар, профсоюз ғына түгел, ә урта синыф вәкилдәренә лә йүнәлтеләсәк. Улар хатта кире фекерҙә булыусы электорат менән дә эшләргә әҙер. Был кампанияла штаб алдында тауыш биреүҙәрҙә грандиоз маҡсаттар ҡуйылмаған, улар тәүге турҙа еңеү яулауҙы тәьмин итергә тейеш.

Бөтә Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге (ВЦИОМ) мәғлүмәттәре буйынса, Владимир Путин РФ Президентлығына кандидаттар араһында лидерлыҡты бирмәй. Аҙна эсендә (14 ғинуарға ҡарата) уның рейтингы 48 проценттан 52 процентҡаса күтәрелгән. КПРФ лидеры Г. Зюгановтың "абруйы" әлегә 11 процент менән баһаланһа, ЛДПР етәксеһенең күрһәткесе үҙгәрешһеҙ ҡала - 9 процент. С.Миронов өсөн тауыш бирергә әҙер кешеләрҙең һаны, киреһенсә, 5 проценттан 4 процентҡа кәмегән. Шундай уҡ яҙмышҡа Г. Явлинский ҙа, бизнесмен М. Прохоров та дусар булған. Социологик һорау алыуҙарҙа Рәсәйҙең 46 өлкәһенән, крайынан, республикаһынан 1600 кеше ҡатнашҡан.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# АҒИНӘЙҘӘР...

## бер ҡорға тупланды

**Мәләүездә Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге 1-се китапхана районың башҡорт йәмәғәтселеге Ағинәйҙәр ҡоро ойоштороу тураһында йыйылып һөйләште. Ултырышты китапхананың башҡорт секторы мөдире Рәзилә Ҡотлогилдина ойошторҙо.**

Башҡорттарҙың борон-борондан ошондай ҡорҙарға тупланып, йыйын йыйып, халыҡ яҙмышы, көнкүреше тураһында фекер алышып, ҡарарҙар ҡабул итеп йәшәүе һәммәбеҙгә лә билдәле. Аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр ҡоро үҙ ваҡытында башҡорт донъяһында баһалап бөткөһөҙ ҙур ижтимағи роль үтәгән. Шуларҙы күҙ уңында тотоп һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының Әсәлек, атайлыҡ һәм балалыҡ мәсьәләләре буйынса комиссияһының инициативаһын хуплап бойомға ашырылды был сара. Унда районың башҡорт йәмәғәтселеге вәкилдәре, башҡорт теле уҡытыусылары һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты вәкилдәре ҡатнашты.

"Йөрәгем - сәңгелдәк минең, унда киләсәк даулай" девизы менән эшләйәсәк Ағинәйҙәр ҡоро бер нисә йүнәлеште үҙ эсенә аласаҡ, тип килешелде. Милли йөҙөбөҙҙө һаҡлауҙың мөһим бер юлы - эскелеккә, тәмәке тартыуға, наркоманлыҡҡа ҡаршы көрәш. Нәҡ ошо кире социаль күренештәр арҡаһында милләтебеҙ күпләп юҡҡа сыға. Үҙәк район дауаханаһы врачы Алһыу Агишева етәкләйәсәк йүнәлеш "Айыҡ аҡыл, сәләмәт тормош - йәшәйештең асылы" тип атала.

Аптраҡ ауылы мәҙәниәт йортоноң "Аҫылташ" фольклор ансамбле етәксеһе Суфия Халиҡова етәкләгән "Йәшәгәс, һин шулай янып йәшә" йүнәлеше халыҡ кәсептәрен тергеҙеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Башҡорттар араһында бөгөн эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр аҙ. Бизнес объекты булырҙай кәсептәребеҙ иһә байтаҡ: шәл бәйләү, балаҫ һуғыу, кейеҙ баҫыу кеүек халыҡ кәсептәре.

Күп балалы өлгөлө әсә Миңлегөл Ҡамбулатова "Ир йөрәген биләр ҡатын-ҡыҙҙың беләгенә бала килешә" йүнәлешендәге эште етәкләйәсәк. Бында татыу, берҙәм ғаиләләрҙе күтәреү, улар миҫалында имен булмаған ғаиләләрҙе тәрбиәләү маҡсаты ҡуйыла.

Демография мәсьәләһе бөгөн бик киҫкен тора. "Сибәрҙәрҙе сибәр яратыр, яңғыҙҙарҙы димсе уятыр" йүнәлешен алып барасаҡ Дамира Клименко башҡорт ауылдарындағы буйҙаҡ егеттәрҙе кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙар менән осраштырырға, ғаилә ҡорорға ярҙам итергә ниәтләй.

"Үҙеңдән һуң ҡалдыр яҡшылыҡ, күңел нурланырлыҡ матурлыҡ" девизы менән эшләүселәр күркәм ғәҙәттәр, әҙәп, әхлаҡ, изгелек, кешелеклек кеүек сифаттар тәрбиәләүгә өҫтөнлөк бирәсәк. Бында шулай уҡ сәскә, бүлмә гөлдәре, бәйләү, тегеү, сигеү кеүек ҡул эштәре буйынса тәжрибә уртаҡлашыу, оҫталыҡ дәрестәре биреү ҡарала. Был йүнәлеште матурлыҡҡа ғашиҡ Наилә Әйүпова алып барасаҡ.

Халҡыбыҙҙың йөрәген уятыуҙың, рухи үҫештең, милләт-ара татыулыҡты нығытыуҙың иң әһәмиәтле юлы - дингә ҡайтыу. Халыҡ араһында ошо хәҡиҡәтте таратыу бурысын Мәләүез ҡала мәсете ҡарамағындағы мәҙрәсә мөғәллимәһе Нурия Исхаҡова үҙ өҫтөнә алды. Уртаҡ фекергә килеү, хәҡиҡәтте табыу, дөрөҫ һығымта яһау өсөн әүҙем апайҙар - Фәүзиә Йәнтилина һәм Нәзифә Ильясова ҡор баштары-ағинәйҙәр итеп һайланды.

Ағинәйҙәр ҡоро йәш быуында халҡыбыҙ тарихына ҡыҙыҡһыныу, хөрмәт, милләтебеҙ үткәненә ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү, милләт-ара дуҫлыҡты нығытыу, милли үҙаңды үҫтереү кеүек бик күп етди бурыстарҙы үҙ иңенә аласаҡ. Уларҙың эше уң буласағына ышанабыҙ, был хәрәкәттең әүҙемселәре быға тиклем дә башҡорт йәмәғәтселеге эшләгән эштәрҙең башында торҙо бит. Әле улар бер ҡорға тупланды. Ә тупланып эшләү нығыраҡ һөҙөмтә бирә икәнен беләбеҙ бит инде.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**



Мәләүез районының Ағинәйҙәр ҡоро ағзалары.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө халҡы мэрияның "ҡыҙыу пейджерына" 2011 йылда 2288 тапҡыр мөрәжәғәт иткән. "Ҡыҙыу пейджер"ға мөрәжәғәттәрҙең күбеһе әүәлгесә торлаҡ йорттарҙы ремонтлауға ҡайтып ҡала. Өфө халҡы өсөн икенсе популяр проблема - ихаталарҙы төҙөкләндереү һәм сүпсарҙы сығарыу. Иғтибар йүнәлтелгән башҡа мәсьәләләр - юлдарҙы ремонтлау һәм төҙөү, йәмәғәт транспорты эшмәкәрлеге. Ә иң аҙ мөрәжәғәттәр сауҙа, төҙөлөш һәм мәғариф темаларына арналған.

✓Өфөлә Иҡтисади енәйәтселеккә ҡаршы көрәш идаралығы хеҙмәткәрҙәре сираттағы йәшерен казиноны япты. Покер клубы бер ай самаһы элек баш ҡаланың Киров районындағы күмәртә базаһы биләмәһендә асылған. Полиция хеҙмәткәрҙәре килгәндә залда унға яҡын кеше булған.Ойоштороусылар менән алып барылған дәфтәрҙәге яҙыуҙарға ҡарағанда, уйын йортонда ставкалар йөҙәр меңгә еткән. Әле уйын бинаһына арест һалынған, полиция хеҙмәткәрҙәре йәшерен казиноны ойоштороусыларҙы асыҡлай.

✓Йыраҡта урынлашҡан тораҡ пункттарҙа йәшәгән студенттарға уңайлы булһын өсөн быйыл алыҫ араға йөрөүсе поездарҙа юл йөрөүгә 50 процентлы ташламалар һаҡланасаҡ. Улар 1 ғинуарҙан ғәмәлгә инә һәм 30 июнгә тиклем оҙайтыла, артабан ташламалар менән 25 августан 31 декабргә тиклем ҡулланып буласаҡ. Льготалар алыҫ араға йөрөүсе бөтә төр поездарҙың вагондарында юл йөрөү өсөн ҡаралған. Улар башланғыс, урта һәм юғары һөнәри белем биреү учреждениеларының көндөҙгө бүлегендә уҡыған уҡыусыларға бирелә.

✓2020 йылға тиклем ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары менән эш итеү системаһын камиллаштырыуға йүнәлтелгән республика программаһын тормошҡа ашырыу буйынса кәңәшмә булып үтте. Билдәләнеүенсә, программаға бәләкәй ауылдарҙы ла йәлеп итеү маҡсатында 200 сүпсар тейәп оҙатыу станцияһын төҙөү ҡаралған. Бында ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын артабан тейәп оҙатыу өсөн уларҙы преслау ойоштороласаҡ. Белгестәр фекеренсә, республиканың Өфө, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Нефтекама, Сибай һәм Күмертау кеүек ҙур ҡалаларында ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү буйынса предприятиелар төҙөү ҡулайлы булыр ине.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Ауыл ерендә эшләргә теләк белдереүсе йәш табип үҙенең социаль хәлен яҡшырта ала. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Земство докторы" проектын тормошҡа ашырыу сиктәрендә федераль үҙәк һәр белгескә торлаҡ һатып алыу, йорт төҙөү өсөн 1 миллион һум компенсация вәғәҙә итә. Ошо маҡсатта Башҡортостанға бөтәһе 553 миллион һум аҡса бүленәсәк. Был турала журналистар менән осрашыуҙа Башҡортостан Республикаһының һаулыҡ һаҡлау министры Георгий Шебаев белдерҙе.**

# АУЫЛДАРҒА...

## белемле табиптар ҡайта

Республика халҡының 40 проценты ауыл ерендә йәшәгәнгә күрә, унда норматив буйынса юғары белемле 3,5 мең табип эшләргә тейеш булһа, бөгөн райондарҙа 1280 квалификациялы табип урыны буш тора. Маҡсатлы программалар ҙа, уҡыу йорттарынан йүнәлтмә менән ҡайтарылған белгестәр ҙә, урындағы етәкселәрҙең торлаҡ мәсьәләһендәге ярҙамы ла был проблеманы хәл итергә мөмкинлек бирмәй ине әле. Хәҙер ауыл еренә эшкә китергә теләк белдергән белгескә федераль ҡаҙнанан - 1 миллион һум, республика бюджетынан 100 мең һум күләмендә компенсация түләнәсәк. БР Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Фидус Ямалтдинов әйтеүенсә, "Земство докторы" проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә дүрт-биш йыл тирәһендә ауыл ерҙәрендә урынлашҡан дауаханалар табиптар менән тәьмин ителеп бөтәсәк. Әле бүленгән 553 миллион һум ике йылға иҫәпләнгән. Быйыл бындай ярҙамды яҡынса 270 кеше аласаҡ, 280 йәш белгес 2013 йылда программаға әләгәсәк.

Түләүҙәрҙең федераль өлөшөнә килгәндә, ул сумманы белгес торлаҡ, йорт һалыу өсөн ер участкаһы һатып алыу, кредитҡа алынған торлаҡ өсөн түләүгә йәки башҡа социаль ярҙам сараларына ҡуллана ала. Быны өсөн белгес, ул эшкә барған учреждение һәм БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы араһында килешеү төҙөлә. Килешеү буйынса белгес был урында 5 йыл эшләргә бурыслы. Компенсацияның республика өлөшөн - 100 мең һум күләмендәге сумманы ҡаплау ваҡыты 3 йыл. Проектты республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы координациялаясаҡ, финанс саралар Медицина страховкаһы фонды аша атҡарыласаҡ. Был мәсьәләләрҙең барыһы ла БР Хөкүмәте ҡарарында сағылыш табасаҡ, әлегә уның проекты әҙерләнеп бөткән, яҡын арала уға ҡул ҡуйыласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дәүләт тарафынан күрһәтелгән финанс ярҙам - был проекттың берҙән-бер ыңғай яғы түгеллеген дә иҫәпкә алырға кәрәк. Ауылда йәшәүсе халыҡ квалификациялы ярҙам алыу мөмкинлегенә эйә булһа, яуаплы һөнәр һайлаған йәштәрҙең үҙҙәре өсөн дә ауыл ерендә эшләү файҙалы булыр ине. Мәҫәлән, ҡалала йәш белгес биш йылға яҡын ҡағыҙҙар тултырып, тәжрибәле табиптар яһаған операцияларҙа ярҙамсы булараҡ ҡына ҡатнашһа, "Земство докторы" проекты сиктәрендә үҙе теләгән районға, ауылға эшкә киткән табип йыл ярым эсендә һыуҙы, утты, баҡыр торбаларҙы ла үтеп, үҙе тәжрибә туплау мөмкинлегенә эйә буласаҡ.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТӨБӘК БАШЛЫҠТАРЫ...

## һайланасаҡ

**РФ Президенты Дмитрий Медведев губернаторҙарҙы президент "фильтры" аша үткәрмәйенсә һайлап ҡуйыу тураһында тәҡдим индергәйне. Әлеге ваҡытта был документ тулыһынса әҙерләнгән дә инде.**

Владимир Путин президент булған ваҡытта тап Д. Медведев ярҙамында тормошҡа ашырылған төп реформаны тарихҡа "оҙатыу"ҙы ла тәүге ярты йыллыҡта тап Медведев башҡарасаҡ. Президентлыҡҡа кандидат Владимир Путин губернаторҙарҙың кандидатураһын һайлауҙа дәүләт башлығының ҡатнашлығы мотлаҡ булырға тейеш, тиһә ла, Медведев был мөмкинлектән баш тартҡан. Йәғни төбәк башлығы вазифаһына дәғүә итеүсе ниндәйҙер партия тарафынан йәки үҙ-үҙен күрһәтеү юлы менән тәҡдим ителәсәк. Тәүге осраҡта ҡултамғалар йыйыу кәрәкмәйәсәк, икенсе осраҡта инде ҡултамғалар йыйыу мотлаҡ булып, әммә ҡултамғаларҙың күләмен һәр төбәк үҙе билдәләйәсәк. Был турала ла документ проекты әҙер. Тәҡдим ителгән закон проекттарының мартҡа тиклем ҡабул ителеүе лә ихтимал.

# АВТОМОБИЛСЕЛӘРҘЕ...

## тағы һынау көтәме?

**Быйылғы йылдың 1 ғинуарынан "Транспортты техник хеҙмәтләндереү һәм айырым закон сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы РФ законына ярашлы, техосмотр үткәреү хоҡуғы "Рәсәй автостраховкалаусылар союзы"на тапшырылған.**

Шуға күрә техник хеҙмәтләндереү менән бары тик аккредитация үткән операторҙар, юридик шәхестәр һәм шәхси эшҡыуарҙар ғына шөғөлләнә аласаҡ. ЮХХДИ-ҙан был вәкәләттәр алынған. Шуға ла улар ҡарамағындағы элекке техник хеҙмәтләндереү пункттары уңышлы ғына ябылып бөтөп бара, ә яңылары, был хеҙмәт төрө менән профессиональ кимәлдә шөғөлләнеүгә әҙер булмағанға күрә, аккредитация үтеп бөтмәгән. Бизнесмендар ҡулына ҡалһа, техосмотрға хаҡтар ҙа, баҙар ҡанундарына ярашлы, бермә-бер артып китерме, тиғән хәүефләнеү ҙә бар.

Йәнә, ОСАГО килешеүе төҙөү өсөн автомобиль хужаһы кәмендә тап алты айға яраҡлы булған техосмотр талоны барлығын күрһәтергә тейеш. Был да ҙур резонанс тыуҙырасаҡ. Ни өсөнмө? Сөнки тағы ла ҙур мәсьәлә һағалай - ЮХХДИ тарафынан салондарға бирелә торған талондар етешмәй.

Накануне.RU баҫмаһы хәбәрсеһенә биргән интервьюһында Рәсәй автомобилселәре хәрәкәте рәйесе Виктор Похмелкин февраль айында уҡ был мәсьәләләрҙең сәйәси төҫ алып, ҙур тауыш сығарасағын фаразлай.

ҺАБАҠТАР

# ШЫРШЫҒА БАРЫП...

## тәүбәмә килдем

**Бынан бер-нисә йыл элек Яңы йыл етеүгә бер-ике көн ҡалғас, ейән-ейәнсәрҙәремде ҡыуандырмаҡсы булып, ауылыбыҙҙан алыҫ булмаған Арғытауға шыршыға киттем.**

Тау түбәһен матурлап йәш шыршылар үҫеп ултырыуына һоҡландым башта. Иң матурын, иң ҡуйы ботаҡлыһын һайлап, балтамды тотоп, шул шыршыҡайға яҡынлаштым. Ләкин был ни хәл? Шыршыға яҡынлашҡан һайын аяҡтың атлар рәте юҡ, йөрәк күкрәктән сығырҙай булып тибә. Күңел тартманы был эшкә, йәғни шыршыны ҡырҡырға ҡул барманы ла ҡуйҙы. Ағас: "Теймә миңә, минең дә бит йәшәгем килә!" - тип илап, ялбарған төҫлө. Уға табан атлайым да, тағы туҡталам, атлайым да, тағы... Башҡа әллә күпме уйҙар килде. Ярай, алып ҡайттым да ти ул шыршыны, балалар ҙа ҡыуанды, ти. Йәшел ҡунағыбыҙ өй түрен йәмләп ултырыр ҙа, күп тә үтмәй, кәҙерә бөтөп, тышҡа сығарып ырғытылыр. Ә тауҙа ҡалһа, тирә-яҡты йәмгә күмеп, үҙен ултыртҡан, бындай гүзәллекте барлыҡҡа килтергән кешегә рәхмәт уҡый-уҡый үҫеп ултырыр.

Элек бит был тау яп-яланғас ине. Урман ҡарауылсыһы булып эшләгән, хәҙер инде хаҡлы ялдағы Биҡкол ауылы кешеһе Суфиян ағай ултыртҡан ағастар инде улар. Күпме тырышлыҡ, көс һалынғанын ағас ултыртҡан кеше үҙе генә белә. Шунда ололарҙың беҙ бәләкәй саҡта: "Ҡороһон ғына киҫ, үҫеп ултырған ағасҡа теймә, тейһәң, ҡулың ҡорор!" - тип иҫкәрткәне иҫкә төштө. Ә мәрхүм Закарин ағай "Берҙе ҡырҡ, өстө ултырт", тип өйрәтер ине...

Барыһын да уйлап, иҫкә алып, тау битендә байтаҡ ваҡыт уйланып торҙом да, шыршыһыҙ ҡайтып киттем. Минең өсөн ҙур еңеү ине был. Ауылға етәрәк ат менән шыршыға китеп барыусы ике йәш кеше осраны. "Кеше ултыртҡан ағасты ҡырҡырға ярамай, әйһе үҫ ала, ҡарғай, тип әйтә ололар. Мин дә шыршыға барғайным, ләкин буш ҡайтып киләм, тәки ҡул барманы уларҙы ҡырҡырға", - тигән булдым егеттәргә. Улар мин әйткәнгә көләп кенә ҡуйҙылар ҙа юлдарын артабан дауам иттеләр. Икенсе көндә Өфөгә барып, яһалма шыршы алып ҡайттым. Хәҙер ошо шыршы янында һәр Яңы йылды ҡаршы алабыҙ.

Әйткәндәй...

Боронғоларҙың әйткәне күп осраҡта тура килә шул. Минә осраған теге егеттәрҙең береһе шул йылда аяғы һынып, дауаханала ятып сыҡты. Бер йылдан һуң икенсеһе эсеп сирләне һәм бер аҙҙан донъя ҡуйҙы. Бына шундай хәл булды беҙҙә. Был, бәлки, шундай тап килеү генә булғандыр. Ә шулай ҙа уйланырға урын бар.

**Ғәлимйән ТӨХВӘТУЛЛИН.**
**Шишмә районы, Түбәнге Хәжәт ауылы.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы

## Йүткереү



❖ 2 ҡалаҡ иҙелгән һарымһаҡты 100 грамм аҡ майға ҡушып болғатығыҙ. Ошо май менән төнгөләккә аяҡ табандарын майлағыҙ, өйөктар кейегеҙ. Был дауа тиҙ арала ярҙам итә;

❖ бер тигеҙ өләшлә ҡырғыстан үткәрелгән һуған, алма һәм бал алып, бергә бутағыҙ. Көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итегеҙ. Алма ҡабығын эҫе һыуҙа төнәтеп, шуны эсегеҙ.

❖ ҡара торманы соҡоп, уны шәкәр йәки бал менән тултырығыҙ. Бер тәүлектән һуң барлыҡҡа килгән һутты көнөнә бер тапҡыр эсегеҙ;

❖ 1 стакан күләмендә кәбестә алығыҙ, уға биш стакан һыу ҡойоғоҙ һәм 30 минут ҡайнап ултырған һыуҙа тотоғоҙ. Артабан уны һөҙөп, баштағы күләмгә етһен өсөн һыу өҫтәргә кәрәк. Килеп сыҡҡан төнәтмәгә 200 грамм бал өҫтәгеҙ. Йылы көйөнсә көнөнә 3-5 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Был дауаны ҡаҡырыҡты шыйығайтып, уның сығыуын еңеләйтеү өсөн ҡулланырға була;

❖ ярты ҡалаҡ алоэ һутын ярты ҡалаҡ бал менән буташтырып, ошо ҡатнашманы бер нисә минут ауыҙҙа тоторға, һуңынан йоторға;

❖ торма йәки кишер һутын һөт менән болғатып, көнөнә алты тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә;

❖ йүткереү ныҡ йонсотканда, ошондай дауа ҡулланып ҡарағыҙ: 1 стакан һөттө ҡайнатып сығарғас та уттан алығыҙ һәм 1 ҡалаҡ аҡ май, 1 ҡалаҡ бал, бысаҡ осонда сода, 1 сей йомортҡаның һарыһы, иң һуңынан 2-3 тамсы 5 процентлы йод өҫтәгеҙ. Балаларға көнөнә 3 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсерергә. Һыуыҡҡыста һаҡларға.

## Һарымһаҡ

Һарымһаҡ иммунитетты нығытыусы, вирустарға ҡаршы көрәшеүсе яҡшы сара иҫәпләнә. Тик ул файҙа килтерһен тиһәгеҙ, уны сей көйөнә ашарға кәрәк. Һарымһаҡтың әсеһен бөтөрөү өсөн һарымһаҡлы маринад әҙерләргә була. Бының өсөн стакандың дүрттән бер өлөшө күләмендә алма һеркәһе һәм бал алып, уларҙы быяла банканың ҡапҡасын ябып болғатырға. Аҙаҡтан уға таҙартылған һарымһаҡ тештәре һалығыҙ. Шыйыҡлыҡ һарымһаҡты ҡаплап торорға тейеш. Банканы һарымһаҡ әҙер булғансы ике аҙна һыуыҡҡыста тоторға. Көнөнә 2-3 һарымһаҡ теше ашарға. Бындай юл менән әҙерләнгән һарымһаҡ бер ай тирәһе һаҡлана.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**




# БУЙҺОНА БЕЛЕҮ... ожмах ҡапҡаларын асыр

**Тәрбиәле ҡатындар үҙ инаныуҙарының боҙоҡлоғонан камил иғтибар менән һаҡланыр. Шәриғәт бойорған нәмәләргә асыҡ аң менән инанып, шәриғәт тыйған нәмәләргә һис тә инанмаҫтар.**

Инаныу - ғаиләлә ир менән татыу йәшәүҙең төп шарттарының береһелер. Улар Бәйғәмбәребеҙ саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләмдең - хаҡ һәм һуңғы бәйғәмбәр икәнлегенә, уның беҙгә килтергән шәриғәте - хаҡ Ислам шәриғәте булып, донъя һәм әхирәттә сәғәҙәт һәм бәхеткә сәбәп икәнлегенә ышанырҙар.

Әммә улар сихырсыға, күрәҙәлек итеүсегә, кешеләр араһын төрлө сәбәптәр менән боҙоу йәки тәҙәтеүселәргә һис ышанмаҫтар. Бының кеүек заттар - мал туҙҙырыусы, алдаҡсы булғанға күрә, тәрбиәле ҡатындарға яҡты йөҙ күрһәтмәҫтәр. Ҡатын кеше күрәҙәгә ышанһа, ире лә шуға уҡ аҡрынлап ышана башлар. Ҡатындың яман инаныуы балаларына ла мираҫ булып ҡалыр. Ахырында, был йорт эсендә иман һәм инаныу ҡалмаҫ, бәлки, ғаилә ағзалары һәр нәмәнән шик-шөбһә генә эҙләүсегә әйләнер. Был йорттоң хәле аҡ ҡорт төшкән умартаға оҡшар.

Тәрбиәле ҡатындар шәриғәткә һәм аҡылға ҡаршы булмаған нәмәләрҙең барыһын да үҙҙәренең ирҙәренә итәғәт ҡылырҙар. Сөнки ҡатын өҫтөндә ирҙәрҙең күп һәм шул нисбәттә ҙур булған хаҡтары бар. Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өмөт иткән һәм әхирәттә шатлыҡ көткән ҡатын өсөн ире менән гүзәл тормош көтөү, уның әйткәндәрен йәне һәм тәне менән тыңлау, итәғәтле булыу тейешле. Бының киреһе булған ҡатын донъялыкта үкенер, әхирәттә, бәлки, ҡурҡыныс яза күрер.

Ғәзиз бәйғәмбәребеҙҙең "биш ваҡыт намаҙын уҡыған, фарыз ураҙаһын тотҡан, үҙен сит кешеләрҙән һаҡлаған, иренә буйһонған ҡатын - Аллаһы Тәғәләнең ожмахына инер" тигән һүҙҙәре бар. Йәғни, иргә итәғәт итеү Ислам диненең нигеҙе булған намаҙ һәм ураҙа менән йәнәшә телгә алына. Бәйғәмбәребеҙҙең "Әгәр ҙә шәриғәтебеҙҙә бәндәләргә сәждә итеү дөрөҫ булһа, ирҙәренә сәждә итеү хаҡында ҡатындарға бойорор инем", тигән һүҙҙәренән ирҙәргә итәғәт итеү, йәғни буйһоноу - ҡатындар өсөн оло бурыс, тигәнлеге һәм итәғәтле ҡатындарҙың киләсәк көндәре бик рәхәт буласағы мәғлүм булыр.

Хәҙистәрҙә тағы шул хаҡта бәйән ителә: иренең рәхсәтенән тыш тоткан ураҙаһы өсөн ҡатын сауаптан мәхрүм буласаҡ; шулай уҡ рәхсәтһеҙ урамға сығып йөрөгән ҡатын, ҡайтып ингәнгә ҡәҙәр, фәрештәләрҙең ләғнәте аҫтында буласаҡ.

Тәрбиәле ҡатындар, холоҡһоҙлоҡ күрһәтеп, ирҙәренең сәс һәм һаҡалдарын ваҡытһыҙ ағартыуҙан, үпкәле ваҡыттарында ҡаршы һүҙ һөйләүҙән һәм теләгенә ҡаршы килеүҙән һаҡланыр. Ире ни ҡәҙәр холоҡһоҙ һәм асыулы булһа ла, ҡатыны тәрбиәле булһа, ул үҙ вазифаһына иғтибар итеп, иренең холҡон яҡшырта белер. Ҡатын тырышһа, ире менән гүзәл көн үткәреүгә ирешә алыр. Күркәм йәшәү нәҡ тә шулдыр. Йәҙҙәрсә әҙәмдәрҙең көсө етмәгән бер хеҙмәтте күркәм холоҡ камил итер. Малдар менән һатып алынмаған бәхет яҡшы холоҡ менән яулап алыныр.

*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

**Дондан Эльбаға тиклем 4 мең саҡрым юл үткән, "Сталиндың шәхси гвардияһы" тип аталған, 78 Советтар Союзы Геройы, 5 Дан ордены тулы кавалерҙарын, төрлө ордендар һәм миҙалдар менән наградланған 3860 батыр тәрбиәләгән 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһы ойоштороловға 70 йыл тулып үтте. Беҙ, төрлө сәйәси мәшәҡәттәр шауҡымында, заман прагматизмы йөгонтоһонда ошо оло датаны тейешле кимәлдә билдәләй ҙә алманыҡ. Үкенес. Бик оло үкенес. Составының 81,4 процентын башҡорттар, беҙҙең атай-олатайҙар, ағайҙар, ҡартатай-олатайҙар тәшкил иткән танкыларға ҡылыс менән ҡаршы барған, күптәре шул яуҙа башын һалған ошо данлыҡлы дивизия яугирҙарын ололап иҫкә алырға хаҡтары юҡмы ни? Һуғыш ваҡытында Сталин үҙенең сығыштарында 15 тапҡыр башҡорт атлыларының ҡаһарманлыҡ өлгөһөн миҫал итеп килтерә. Һуңынан батырҙарыбыҙ иҫтәлеге алдында тубыҡланырҙай булырбыҙ ҙа ул, илебеҙ генә булмаҫ. Әгәр ҙә редакциябыҙ ишеген уҡыусыбыҙ Рев Ҡадиров асып инмәһә, кем белә, бәлки, был яҙмалар ҙа баҫылмаҫ ине.**

# ТУБЫҠЛАНЫРҘАЙ БУЛЫРБЫҘ ҘА,

## илебеҙ генә булмаҫ...

- Ағайым Ҡадиров Сабир Рәхим улы милләте буйынса башҡорт, 1906 йылдың мартында Башҡортостандың Бәләбәй районы Тоҙлоҡуш ауылында донъяға килгән, – тип һөйләп китте Рев ағай Ҡадиров. - Бәләбәй педучилищеһын тамамлағандан һуң ул Туймазыла уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләй, район мәғариф бүлегенә етәкселек итә. Аҙаҡ уны Өфөгә сәнғәт техникумына директор итеп ҡуялар. Ул шулай уҡ Башҡорт опера һәм балет театры директоры, һуғыштан һуң сәнғәт идаралығы начальнигы, Башҡорт дәүләт пединститутында партбюро секретары, Өфө сәнғәт училищеһы директоры, уҡытыусы булып эшләй.

Һуғыш ваҡытында ағайым 112-се Башҡорт атлы кавалерия дивизияһының политбүлек начальнигы урынбаҫары вазифаһында Волганан Эльбаға ҡәҙәр юл үтә, Сталинград янында һуғыша, Днепрҙы аша сыға, Донбасты азат итеүҙә ҡатнаша, Польшаны азат иткәндә ҡаты яралана. Ҙур батырлыҡтар күрһәткәне өсөн ею Ҡыҙыл Байраҡ, I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы, Ҡыҙыл Байраҡ ордендары, күп һандағы миҙалдар менән наградлана. Һуғыштан һуң Сабир ағайым Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында идаралыҡ начальнигы булды, Юғары Советҡа депутат итеп тә һайланды.

1984 йылдың декабрендә вафат булғанына тиклем Сабир ағайым һуғышта башҡорт егеттәре күрһәткән батырлыҡтары иҫтәлеген, уларҙың исемен мәңгеләштереү маҡсаты менән йәшәне. Был ваҡиғаларҙы һөйләгән саҡта ул ныҡ тулҡынланыр, яуҙа башын һалған егеттәрҙе иҫкә алғанда күҙҙәре йәшләнер ине. Шуға күрәләр ҙә уның Башҡорт атлы кавалерия дивизияһы ҡаһарманлығы хаҡында төрлө йылдарҙа сыҡҡан китаптарын тыныс ҡына уҡып та булмай. Улар: "Волганан Эльбаға ҡәҙәр" (1947), "Утлы һыуҙар аша" (1977), "Урал бөркөтө" (1981). Түбәндә мин һеҙгә ағайымдың 1947 йылда сыҡҡан "Волганан Эльбаға ҡәҙәр" тигән китабынан өҙөктәр тәҡдим итәм. Уларҙы Сабир ағайым уйлап сығарып яҙмаған, китап уның һуғышта алып барған көндәлектәренә таянып ижад ителгән.

### Беренсе удар

...Мин яҡындағы бер соҡорға йәшерелгән аттарҙың хәлен белергә киттем. Юлда ҡаты бер ыңғырашыу тауышы мине үҙенә саҡырҙы. Ашығып, янына барҙым. Ни күҙҙәрем менән күрәйем, совхоздың хөрмәтле ҡарты Иващенко ҡанға батып ята. Әйләдем.

- Нихәл, иптәш Иващенко? - тип ҡул һуҙҙым. Ләкин ғүмер буйына эш һөйгән, үлек ағастарға йән индерә һәм татлы емештәр үҫтерә торған йомарт ҡулдары юҡ ине инде уның. Ул минең һүҙҙәремде лә ишетмәне. Сөнки уның ҡырҡылып ташланған ҡолаҡтарының барабандарына ҡан тулып ойошҡайны. Ул бөтә көсөн туплаңы ла:

-Бына, немецтар мине ни эшләтте. Ҡулдарымды, ҡолаҡ япраҡтарымды ҡырҡып, таш баҙға ташланылар. Тик 62 йәшлек ҡарсығым ярҙамы менән ҡасып ҡайттым. Совхозда улар барыһы 7 генә сәғәт торҙолар. Ләкин шул ваҡыт эсендә 17 кешене аҫтылар, 69 кешене аттылар, 65-әр йәшлек 11 кешенең ҡулдарын бәйләп, ҡайҙалыр алып киттеләр. Хәҙер инде совхоздың матур биналары ла, малдары ла, шатлыҡ менән йәшәгән кешеләре лә юҡ. Мин һеҙҙән һорайым: беҙҙең изге тупрағыбыҙға фашистарҙың бысраҡ тәндәрен күммәгеҙ, һыуҙарыбыҙға ташлап бысратмағыҙ, утҡа яндырып, һауаға осороғоҙ! - тине. Ул тағы ла ниҙер әйтергә теләне. Ләкин, ҡапҡан нәмәһен йота алмай төйөлгән кеше төҫлө ғазаплана башланы һәм немецтар яғына ҡарап, тештәрен ҡыҫты ла, мәңгегә тынды.

Мин батареяларҙы үтеп, совхозға яҡынлашҡан саҡта немецтар "А" йылғаһының теге яғына ташланғайнылар. Батыр Салауат тоҡомдары булған башҡорт егеттәренең ҡаты ударына осрап, тештәрен һындырған дошман,

*МАТУР ХӘТИРӘЛӘР*

# НИ БУЛДЫ БЫЛ ЗАМАНАҒА,

## тарттырылдымы язаға...

**Ғүмер үткән һайын, ологая барған һайын бала, үсмер саҡтағы матур хәтирәләр йыш иҫкә төшә башлай икән. Бала саҡта, ошо мәлдәрҙе һағынып иҫкә алырбыҙ әле, тип башҡа ла инеп сыҡмаған бит инде. Ҡайһы бер ваҡиғалар тураһында "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына ла һөйләйем әле.**

### Ағас ултыртыу

1956-1957 йылдарҙа ил буйынса пионерҙар хәрәкәте башланды. Беҙ ҙә ауылыбыҙҙа ошо хәрәкәткә ҡушылып, ағастар ултырта башланыҡ. Беҙ был йөкләмәне шул тиклем ихласлыҡ менән башҡарҙыҡ. Мәктәп, контора, медпункт һәм һәр беребеҙҙең йорто янына матур ағастар ултыртып сыҡтыҡ. Мәктәп янында шау-гөр килеп, айырыуса бер дәрт менән эшләгәнебеҙ әле бөгөнгөләй хәтеремдә. Хәҙер ауылыма ҡайтһам (Баймаҡ районы Ярат ауылы), үҙебеҙ ултырткан ағастарға ҡарайым да, берсә шул саҡтарҙы һағынып әрнейем, берсә иҫтәлек булып үҫеп ултырған ағастарыбыҙға ҡарап ҡыуанам.

### Бесән мәлендә

Йәй көндәрендә колхозға ла ҙур ғына ярҙамыбыҙ тейә торғайны. Ун өс, ун дүрт йәшлек малайҙар, ҡыҙҙар бесәндә ат тырмаһы менән эшләй торғайныҡ. Тәүҙә ҡыйынлыҡ менән ат егергә, атта һыбай йөрөргә өйрәндек. Сөнки эшләгән еребеҙ ҡыуышлыҡтан алыҫ ине, кискеһен тырманы ҡалдырып, әйәрһеҙ атта сабышып ҡайта торғайныҡ. Иртәнсәктән алып көнө буйы эҫелә бесән тырматабыҙ. Бик тә түҙемле булған икәнбеҙ, тип хәҙер ҙә аптырап ҡуям. Ҡараңғы төшкәнсе эшләйбеҙ. Ярышып, сабышып ҡайтабыҙ. Минең атым Хәйбулла ҡушаматлы ине, беренсе булып ҡыуышлыҡҡа килеп етә. Ә ат ҡараусы Хәйбулла ағай ҡәнәғәт йылмайып ҡаршы ала, сөнки ат уныҡы ине.

Ҡайтып, ашап алғас, арыуҙарыбыҙ ҙа юҡҡа сыға, бер аҙ уйнап, күңел асып алабыҙ. Тик арабыҙҙа тәртип боҙоп, тәмәке тартып йөрөүсе малайҙар юҡ ине. Ятып йоҡлайбыҙ ҙа иртән тороп, тағы ла атта сабышып барып, эшкә тотонабыҙ. Хәҙер балаларым, ейәнсәрҙәремә оло ғына өләсәйҙәренең атта сабышып йөрөүе әкиәт һымаҡ ҡыналыр, ышаныуҙы ла ҡыйындыр. Ләкин ул заманда ҡатынҡыҙҙың атта сабып йөрөүе ғәҙәти күренеш ине.

### Яланға ашлама ташыу

Беҙ, һуғыш осоро балалары, аслығын да, әсе-сөсөһөн дә татып үҫтек бит инде. Хәтеремдә, 1947 йылда колхоздың игене уңды. Тәүге тапҡыр шул тиклем мул уныш йыйып алыуыбыҙ бәләкәй генә булһам да иҫемдә ҡалған, хатта

*Ә хәҙер ауылыбыҙ эргәһендәге ташландыҡ, буш һарайҙарға ҡарап, йөрәк әрней, эс боша. "Ни булды был заманаға, тарттырылдымы язаға?" тип яҙғайным бер мөнәжәтемдә.*




Сабир һәм Рев Ҡадировтар.

бынан һуң үҙенең һөжүмен ҡабатламаны.

Бөгөн бына 21 июль. Шул һуғышта батырлыҡ күрһәтеүсе һәм боевой хәрәкәт менән дөрөҫ етәкселек итеүсе батарея командиры өлкән лейтенант Хәмзә Ғиниәтуллин һәм батарея комиссары Мостафин иптәштәренең күкрәктәренә тыуған илебеҙҙең Ҡыҙыл Йондоҙ орденын ҡаҙап ҡуйҙы...

*1942 йыл, 21 июль.*

## Сержант Байғужин менән булған хәл

...Ҡаты ауырыуҙар бүлмәһендә ятҡан өлкән сержант Байғужин миңә булып үткән һуғыштан бер эпизод һөйләне:

-Беҙ "П" хуторына ингәндә немец танкылары һәм автоматчиктары ауылдан китеп бөтмәгәйне әле. Шуның өсөн дә мин, Волков һәм Сәрсәнов - өсәүләп ике ПТР алып, немец танкыларына ата башланыҡ. Дошмандың ике танкыһын яндырҙыҡ, ләкин башҡа танкылар беҙгә ҡарата ҡаты ут асты. Беҙҙең тирәлә шартлаған дошман снаряды ярсыҡтарынан беҙ ҡаты яраландыҡ, мин яраланып ерҙә ятҡан көйөнсә беҙгә ҡарап килгән немец һалдаттарына атыуҙан туҡтаманым. Бына бер мәл патрондар бөттө, граната ташларға теләнем. Торорлоҡ көсөм юҡ. Мин шунда иҫемдән яҙҙым... Күҙемде асып ебәрһәм, үҙемде немецтар араһында күрҙем. Ауыр ыңғырашыу ишетелә. Бер немец офицеры Волковтың табан аҫтына ҡаҙаҡ ҡаға... Волков бер аҙҙан бөтөнләй өнһөҙ ҡалды... Мин уны үлгәндер тип уйланым һәм ҡосаҡлап алдым. Ҡараһам, Волков аҫҡы иренен ҡаты тешләгән дә, эстән һыҡырап, янында торған немец тәржемәсеһенә: "Һис бер нәмә белмәйем", - ти ҙә, тағы тынып ҡала.

Яуап ала алмағанға үртәлеп, немец уға тимер сыбыҡтан үргән таяҡ менән биш тапҡыр ҡаты һуҡты, ә Волков "ҡәбәхәттәр", тигән һүҙҙән башҡа һүҙ әйтмәне. "Һөйөклө дуҫым Волковтың был тиклем ғазапланыуы минең йөрәгемдә дошмандарға булған нәфрәтте йөҙләтә арттырҙы. Ниндәй генә ғазаптар кисерергә тура килһә лә, ныҡ булырға ант иттем. Тыуған илем алдында биргән изге антымды ҡаҡшатмаҫҡа тағы бер ҡат ант бирҙем...

...Тиҙҙән ишек асылды, өс немец һалдаты инде. Мине йорт стенаһына һөйәп ҡуйҙылар, ике ҡулымды ҡайырып, беләктәрем аша бүрәнәгә дүрт оҙон ҡаҙаҡ ҡаҡтылар, кейемдәремде өҙгөләп ташлап, бысаҡ менән тәнемде сыйғыланылар, яраларыма тоҙло һыу һибә башланылар. Береһе артынан береһе, өҙлөкһөҙ ниндәйҙер һорауҙар бирҙеләр.

Мин күҙемде асҡанда немец палачы иҙәндә тубыҡланып торған Сәрсәневҡа пистолетын терәп, ниҙер һорай ине.

Сәрсәнев:

-Беҙ - гвардеецтар... Беҙ... - тип башлағайны, әйтеп бөтөрә алманы, яуап алыуҙан өмөтөн өҙгән немец уны атып үлтерҙе.

-Тиҙҙән,- тине Байғужин, - беҙҙе атырға бойороҡ биреп, офицер ҡайҙалыр сығып китте. Беҙҙе өҫтөрәп, өйҙән алып сығырға әҙерләнделәр. Ишек асылды... Асыҡ ишектән немецтар түгел, беҙҙең Баязитовтар килеп инде. Беҙҙе күмеү өсөн ҡаҙылған соҡорға ҡулға алынған өс немецтың үҙҙәрен күмдек...

## Ҡарт Днепр ҡурай тыңлай

...Бына төнгө сәғәт 12. Беҙ урман менән барып, Днепрҙың ярына уҡ килеп еттек. Һәр кем йылғаға башҡаларҙан алданыраҡ барып етергә, атына һыу эсерергә, үҙенең битен йыуырға ашҡына ине.

Баймаҡтың ҡарт ҡурайсыһы Сабитов Шакир Днепрҙың ярына ултырып, өйҙән алып килгән еҙ ҡурайында "Урал" көйөн уйнап ебәрҙе. Атаҡлы яҙыусы Ғәлиәскәр Камалдың улы - беҙҙең дивизияның һалдаты Камалов матур тауыш менән уға ҡушылды:

*Ирәндеккәй тауҙың, ай, башынан*
*Шылтырап-шылтырап аға ҡар һыуы.*
*Фашистарҙы тамам еңмәйенсә*
*Баҫылмаҫ та йөрәк ярһыуы.*

Был Днепр буйында яңғыраған тәүге йырыбыҙ ине беҙҙең. Егеттәр шул дәрт, шул ашҡыныуҙар аҫтында Днепрҙы аша сығыу өсөн һалдар әҙерләй башланы...

Ағиҙел буйҙарынан килгән егеттәр - башҡорт халҡының ғәйрәтле улдары Днепрға ярҙамға килделәр һәм Сталин гвардияһы сафында үҙҙәренең украин туғандарын дошман ҡоллоғонан ҡотҡарыу көрәшендә һынатманылар...

## Башҡорт ҡыҙы Нәғимә

Ҡараңғы төштө. Һәр кемгә йоҡларға приказ бирелде. Ләкин бөгөн, ҡаты арыуға ҡарамаҫтан, бер кем дә йоҡоға китә алмай. Һәр кем таң алдынан башланасаҡ һөжүм тураһында уйлай. Күптәр быға тиклем булып уҙған ҡаты һуғыштарҙы берәм-берәм күҙ алдына килтерә. Унда булып уҙған тәжрибәләрҙе яңы килгән иптәштәр менән уртаҡлаша. Ҡайһы берәүҙәр ҡараңғы землянка мөйөшөндә янып торған һуҡыр лампа ҡырына ултырып, яҡындарына хаттар яҙа.

Мин бөгөн башҡа ваҡытҡа ҡарағанда ла иртәрәк уяндым һәм ҡайҙалыр, урмандамы берәүҙең йырлағанын ишеттем:

*Алыҫтарға китеп, мылтыҡ атып,*
*Арыҫландай эҙләп дошманын,*
*Ватан ҡушҡас, халҡы көткәс,*
*Йәлләмәҫ тә батыр үҙ ҡанын.*

Был йыр минең уйҙарҙы ҡайҙалыр йыраҡҡа алып китте. Мин уны яратып тыңланым, күптән ишетелмәгән башҡорт халыҡ йыры мине генә түгел, бик күптәрҙе йоҡонан уятып, үҙ землянкаларынан, шалаштарынан асыҡ һауаға сығырға мәжбүр итте. Йырлаусы, магнит көсө менән тартҡан шикелле, һәр кемде үҙенә яҡынлаштырҙы. Мин уның йырлауын теләп, шул йыр тауышы килгән яҡҡа оҙаҡ ҡарап торҙом, ләкин туған моң башҡа ҡабатланманы.

Был йырҙы йырлаусы башҡорт ҡыҙы Нәғимә ине. Мин землянкаға инеп, подполковник Маркарянға башҡорт халҡының моңо, уның музыкаһы хаҡында һөйләй генә башлағайным, полк дежурныйы: "Иптәш майор, разведчиктар ҡайтты. Өс фрицты пленға төшөргәндәр", - тип хәбәр итте...

---

ырҙынға һыймай, һәр бер өйҙөң урамына килтереп ауҙарғайнылар игенде. Әсәйем, атайымдың ҡыуаныуы ныҡ күҙ алдымда. Шул ваҡытта ике ҡыҙ артынан өсөнсөгә Миңнәхәт ҡустым тыуғайны, "Минең улым тыуғанға Хоҙай мул уңыш бирҙе", тип атайым икеләтә шатланды. Элек колхоз эштәре лә гөрләп торор ине. Ул эштәрҙә беҙҙең кеүек балаларҙың да әҙ генә булһа ла үҙ өлөшө булғандыр. Бишенсе, алтынсы синыфта уҡығанда, ҡар ятмаҫ элек, колхоз идараһы ҡушыуы буйынса беҙ синыфыбыҙ менән көл йыйырға сыға инек. Дәрестәрҙән һуң һәр бер өйгә инәбеҙ ҙә мейестәренән көл алып, ҙур ҡумтаға тултырып, ат менән баҫыуға алып барып ауҙара инек. Нисек беҙгә ул эште ышанып тапшырғандарҙыр. Тимәк, беҙҙә үҙ аллылыҡ тәрбиәләнгән булған. Хәҙер балаларҙы бигерәк ныҡ ҡурсалайбыҙ шул инде...

## Шефлыҡ

Ҡыш көнө лә колхозыбыҙға ярҙамыбыҙ тейә ине. Кискеһен фермаға барып, үҙебеҙ шефлыҡҡа алған быҙау ҡараусы апайҙарға ярҙам итә инек. Һәр беребеҙҙең бер ҡура быҙауыбыҙ булды, уларға һөт эсереп, аҫтарын таҙартып, апайҙарҙы ял иттереп, ҡыуандырып, үҙебеҙ ҙә бик ҡәнәғәт булып ҡайтып китә торғайныҡ.

Үҫә төшкәс, йәйге каникулдар мәлендә фермаға быҙау ҡараусы булып эшкә төшә торғайныҡ. Элек йәй көндәре ферма йәйләүгә күсеп бара ине бит. Хәтеремдә, беҙ Сәрүәр дуҫым менән 9-сы класты тамамлағас, йәйләүгә сығып, быҙауҙар ҡарарға эшкә урынлаштыҡ. Малҡайҙарҙы бик ярата инек, ауырып китһәләр, илай торғайныҡ. Кисен 4-5 км алыҫлыҡтағы ауылға кино ҡарарға барабыҙ. "Стрекоза" фильмындағы йырҙы отоп алып, Сәрүәр менән ағас баштарына менеп йырлар инек. Элек бит фермаларҙа эш ҡайнап тора ине. Һауынсыларға ла, башҡаларға ла эш булған, хеҙмәт хаҡы ла алғандар. Ә хәҙер ауылыбыҙ эргәһендәге ташландыҡ, буш һарайҙарға ҡарап, йөрәк әрней, эс боша. "Ни булды был заманаға, тарттырылдымы язаға?" тип яҙғайным бер мөнәжәтемдә. Гонаһтарға ла батҡанбыҙҙыр инде... Хоҙай һис тә риза түгелдер күптәребеҙҙең йәшәйешенән...

## Биртек

Биле ауыртһа, өләсәйем беҙҙе биртек йыйырға ебәрә торғайны. Биртек - ул башҡорт халҡының бер көнкүреш йолаһы. Бер ғаиләнән иң өлкән бала һәм икенсе ғаиләнән иң кесеһе бергәләп биртек йыялар. Йолаһының талабы шул ине. Мин үҙ ғаиләбеҙҙә иң өлкән бала инем, Мәғәтифә дуҫым - иң кесеһе. Һәр бер өйҙөң ишеген асабыҙ ҙа артыбыҙ менән әйләнеп баҫып, һауытыбыҙҙы ҡуябыҙ һәм: "Биртек, биртек бир инде, өләсәйемдең биле биртенгән",- тип әйтәбеҙ. Һауытыбыҙға семтекләп булһа ла һәр кем май, ҡорот һ.б. ризыҡ һала. Өләсәйем рәхмәттәрен әйтеп "дауалана".

Күпме йылдар уҙһа ла, биртек йыйыуҙар һәр ваҡыт иң матур хәтирә булып күңелем төбөндә һаҡлана. Бынан ун биш йылдар элек Мәғәтифә менән тыуған ауылымда осрашып, туйғансы һөйләшеп, ошо биртек йыйғандағы хәтирәләрҙе иҫкә алып ултырғайныҡ. Хәҙер инде ошондай матур йолалар ҙа сәхнәләрҙә генә ҡалды...

**Ғәлимә ӘХМӘТОВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

---

### БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАРҘЫҢ ДӘҮЛӘТ ИДАРАҺЫ

**Донъяла дәүләт идараһы һәм үҙидаралыҡ институттары булмаған бер генә йәмғиәт тә юҡ. Зәки Вәлиди билдәләүенсә, хандар һәм "вәлиҙәр", "бейҙәр"ҙән тыш солтандар, йәғни икенсе төрлө әйткәндә, уландар ҙа була.**

Шулай уҡ "дыуан" (ведомство) кеүек дәүләт идараһы органдары ла билдәле. Уның башында "дыуан башлығы" торған. Күрәһең, ведомстволар министрлыҡтарҙың функцияларын үтәгәндер. Улар иҫәбендә "хазинадар" етәкселегендә ҡаҙна ла була. Финанс системаһы төрлө тармаҡтарға бүленә. Мәҫәлән, хәрби хеҙмәт өсөн "алапа" йәки "олофө" тигән чиновник аҡса түләй.

Сығанаҡтарҙа хәрби дәрәжәләргә лә иғтибар бирелә, мәҫәлән, шундайҙарҙың береһе - "даруға" - әләм йөрөтөүселәр.

Башҡорт этносы тарихында урындағы үҙидаралыҡ институттары - ҡыҙыҡлы, әммә аҙ өйрәнелгән тема. Ватан һәм сит ил әҙәбиәтен анализлап, уларҙың тотош этнос тарихында күсәгилешлеккә эйә булыуы асыҡлана. Дөйөм, мәҫәлән, төрки һәм мосолман үҙидаралыҡ институттарынан тыш, бары тик башҡорт этносына ғына хас, менталитетҡа, хужалыҡ итеүгә, биләмә урынына һәм башҡа факторҙарға бәйле айырым институттар булыуы ла билдәле.

Башҡа төрки халыҡтарҙағы кеүек үк, үҙидаралыҡта даими үткәрелеп килгән йыйындар ҙур роль уйнаған. Барлыҡ ырыу-ҡәбиләләрҙең билдәле вәкилдәре: диндарҙар, хандар, хәрби етәксе, старшиналар ҡатнашлығында үткән халыҡ йыйылыштары закондар сығарыу органы ғына түгел, мөһим мәсьәләләр буйынса ҡарар ҡабул итергә кәрәк булғанда Ойоштороу органы ла булып торған. Йыйындарҙа этностың тормошона ҡағылышлы мәсьәләләр хәл ителгән, һуңынан инде улар байрам менән тамамланған, бәйгеләр ойошторолған, йырауҙар, ҡурайсылар һәм сәсәндәр сығыш яһаған.

Батша указы менән 1739 йылда йыйындар туҡтатыла.

Барлыҡ мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә демократик орган - Аҡһаҡалдар ҡоро - Ҡоролтай мөһим роль уйнаған. Йыйындарҙың, ҡоролтайҙарҙың ҡарарҙарын тормошҡа дәүләт башлығы - хан тормошҡа ашырған. Уға вәлиҙәр һәм бейҙәр буйһонған. Аҡһаҡалдар ҡоро, ғәҙәттә, йыйын алдынан йыйылған. Ул халыҡ йыйылышы ҡарарҙарына билдәле йүнәлеш биргән.

Башҡорт биләмәләрендә тормош-көнкүреш проблемаларын яйлау, башҡорт ҡәбиләләре, ырыуҙары араһында мал көтөү, ер эшкәртеү, һунарсылыҡ итеү, умарта тотоу мәсьәләләрен хәл итеү күпселек осраҡта урындағы етәкселәр - йәмғиәт ҡушыуы һәм йәмғиәттең даими контроле аҫтында аҡһаҡалдар тарафынан тормошҡа ашырылған. Башҡорт социумының урындағы үҙидаралыҡ принциптарының теоретик нигеҙе шунда ла инде. Үҙ-үҙе менән идара иткән социум ҙур көскә эйә булған.

✓ *Һайлауҙар алдынан арабыҙҙан кемдер халыҡҡа сығып мөрәжәғәт иттеме икән? Әҙиптәр матбуғат аша ла, һәр өйгә үткән телевидение-радио аша ла үҙ фекерен еткереп торорға тейеш. Бына шуны граждандлыҡ позицияһы тип аңлайым.*



**Әҙәбиәт һәм йәмғиәт борондан бер-береһенән айырылғыһыҙ төшөнсәләр булған. Китап, художестволы әҫәр шәхес булып формалашыуға ныҡ йоғонто яһаған. Бөгөн хәл нисегерәк һуң? Әҙәбиәт менән йәмғиәт үҙ-ара ниндәй бәйләнештә тора? Бөгөн һүҙҙең, сәнғәттең көсө һиҙелерлек кәмегән һымаҡ тойолмаймы? Ғөмүмән, рухи тормошобоҙ ниндәй, уны үҫтереү өсөн ниҙәр эшләйбеҙ? Ошолар хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ филология фәндәре докторы, шағир һәм әҙәби тәнҡитсе Фәнил Тимерйән улы КҮЗБӘКОВ һәм шағир, яҙыусы Дамир Мөлҡаман улы ШӘРӘФЕТДИНОВ менән.**

**▸ Дөйөм ил буйынса ижтимағи аң үҫешкән мәлдә милли интеллигенцияның ҡарашы, позицияһы ниндәй булырға тейеш, сәйәсәтте үҙ халҡының файҙаһына үҙгәртеү йәһәтенән ул ниндәй роль биләп тора? Ғөмүмән, зыялыларыбыҙҙың үҙ ҡарашы, фекере бармы, әллә улар башҡаларҙың йүнәлеше ыңғайына ғына атлаймы?**

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Ундай йәмғиәтте дәүләт төҙөргә тәкдим итә, тип әйтмәҫ инем. Дәүләт миллилекте башҡа юл менән бөтөрөргә маташа. Элек совет халҡы тип яр һалһалар, бөгөн Рәсәй милләтен килтереп сығырға тырышалар. Ләкин Рәсәй шарттарында власть, теләйме-теләмәйме, милли сәйәсәткә иғтибар итергә мәжбүр буласаҡ. Сөнки бер милләт тә , шәхестәр араһ-

торабыҙ. Әммә арабыҙҙа барыбер граждан булған шәхестәр табыла. Ана шулар оппозицияны барлыҡҡа килтерә һәм халыҡтың әүҙемлеген арттырыуға нисек тә булышлыҡ итә, халыҡты уянырға мәжбүр итә. Быны әҙип ике юл менән башҡара. Беренсенән, әҙәби әҫәрҙәре аша йоғонто яһай. Икенсенән, пропаганда алып барырға тейеш. Ә пропаганда - халыҡ менән тура-

үҙҙәре юҡ. Әҙип тәү сиратта шәхес булырға тейеш бит. Беҙҙә шәхестәр юҡ. Хәҙер һәр пенсионер тиерлек китап сығара ла, мин әҙип, ти ҙә йөрөй. Йәнәһе, бөтәһе лә юғары белемле, бөтәһе лә яҙыусы. Әммә шәхес булмауы арҡаһында халыҡты үҙ артынан әйҙәй алмай ундайҙар...

**▸ Әҙәбиәтте бер сәнғәт төрө тип ҡарайбыҙ. Тимәк, дөйөм сәнғәттә лә шәхестәр юҡ, ул да халыҡты үҙ артынан әйҙәрлек түгел...**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Дөйөм сәнғәттең кимәле ниндәй, әҙәбиәттең кимәле лә шундай. Әммә әҙәбиәтте сәнғәттең бер төрө тип кенә ҡарарға тейеш түгелбеҙ. Сөнки иң башта һүҙ булған, тибеҙ. Күпселек сәнғәт төрҙәренең нигеҙендә һүҙ ята. Шуға күрә әҙәбиәтте беҙгә тәү сиратта идеологик ҡорал тип ҡарарға кәрәк. Әйткәндәй, был беҙҙең халыҡҡа ғына кәрәк, тип уйларға ярамай. Ниндәй генә

Йәғни, барыһы ла бер-береһенә тығыҙ бәйле: әҙәбиәт - йәмғиәтте, йәмғиәт әҙәбиәтте үҫтерә.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** "Алтын осор"ҙағы бөтә әҫәрҙәр тәнҡит реализмы күҙлегенән яҙылған. Ә тәнҡит реализмы - ул власҡа саҡырыу ташлау. Тимәк, ул ваҡытта граждандлыҡ позицияһы булған. Бер уйлаһаң, дворяндарға нимә өсөн борсолорға кәрәк булған? Ләкин граждан булараҡ халыҡ мәнфәғәтен яҡлап күтәрелгәндәр бит. Тимәк, бөгөн беҙ ниндәйҙер фантастика, детективтарҙы түгел, ә йылдар буйы һаҡланып килгән тәнҡит реализмын хәҙерге әҙәбиәттең төп һәм иң кәрәкле йүнәлеше тип танырға мәжбүрбеҙ. Шул уҡ Мәжит Ғафуриҙың әҙәби алымы беҙҙең өсөн актуаль булып сыға. Ижадында бер уйҙырма юҡ, барыһы ла тормоштан алынған, шул рәүешле яҙыу ысынбарлыҡтың кире яҡтарын бөтә дөрөҫлөгөндә күрһәтеп тора.

# ЯҘЫУСЫ МЕНӘН БАҠСАСЫ

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Ижтимағи аң үҫешә, тип әйтмәҫ инем, ул ни бары әүҙемләшә генә, ә әүҙемлектең сәбәбе, мәҫәлән, илдәге һуңғы һайлауҙар булды. Дөрөҫ, илдә граждандлыҡ йәмғиәте үҫешә бара, тип йыш һүҙ сығаралар. Әммә граждан кем ул? Башта шуны асыҡлайыҡ. Шағир булмауың мөмкин, әммә граждан булыуың - бурыс, тигән билдәле һүҙҙәр бөгөн дә актуаль. Тимәк, граждан - иле, халҡы өсөн борсолоп йәшәгән шәхес ул. Тап шундай шәхестәр күпселекте тәшкил иткәндә генә граждандар йәмғиәте хаҡында һүҙ йөрөтә алабыҙ. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, илдә әле ниндәй йәмғиәт икәнен әйтеүе лә ҡыйын. Беҙ һаман да, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көтөү кеүегерәк кенә йәшәйбеҙ түгелме икән?

Граждандар йәмғиәте формалашһын өсөн шул йәмғиәткә торошло матбуғат булыуы шарт, тип уйлайым. Ирекле мабуғат, ирекле һүҙ юҡ икән, ниндәй йәмғиәт тураһында һүҙ алып барыу мөмкин? Ҡыҙғаныс, әммә күптәр күҙаллауынса, бөгөн беҙҙә ирекле матбуғат юҡ. Хатта Мәскәү баҫмалары менән сағыштырғанда ла беҙҙең матбуғат ирекле һүҙ әйтеү йәһәтенән бер башҡа түбән тора.

Бөгөн халыҡ мәғлүмәтле. Хәҙер барыһы ла асыҡ. Ошо асыҡлыҡ заманында властың ниҙер йәшерергә тырышыуы иң ҙур хата. Власть халыҡҡа үҙе асыҡтан-асыҡ бар проблемалар хаҡында әйтергә тейеш. Шундай етәкселек кенә нимәгәлер өлгәшә ала. Ә беҙҙә ни өсөн асыҡлыҡ юҡ? Сөнки тура фекер алышыу башланһа, кемдең кем икәне күренәсәк. "Королдең яланғас" булыуы асыҡланасаҡ. Ләкин беҙгә "яланғас король"де әрләүҙән бер файҙа ла юҡ, ул беҙҙең һүҙҙе ишетмәй ҙә. Иң яҡшыһы - үҙ эшебеҙҙе еренә еткереп башҡарайыҡ.

**▸ Граждандар йәмғиәте төҙөлһә, милли йәмғиәттең икенсе планға күсеүе ихтимал түгелме? Дәүләт тә илдә милләттәрҙе танырға теләмәүҙән граждандар йәмғиәтен төҙөүгә ынтылмаймы икән?**

ындағы мөнәсәбәттәр кеүек үк, башҡа милләт иҫәбенә үҙ хәлен ҡайғыртырға тейеш түгел. Ғәҙел юлда булмаған милләттең киләсәге юҡ.



нан-тура бәйләнешкә инеү ул. Әйтәйек, элекке осорҙа Аҡмулла сәсән ауылдан-ауылға йөрөп, ижады, шиғырҙары менән халыҡҡа йоғонто яһаған. Беҙ ҙә әленән-әле осрашабыҙ ул халыҡ менән, ләкин һүҙебеҙ мөһим ваҡиғалар алдынан, һынылышлы мәлдәрҙә халыҡҡа әйтелмәй ҡала. Ә тимерҙе ҡыҙған сағында һуғып ҡалырға кәрәк бит. Янғындан һуң һүҙ әйтеүе иһә халыҡҡа әллә ни тәьҫир итмәй. Мәҫәлән, һайлауҙар алдынан арабыҙҙан кемдер халыҡҡа сығып мөрәжәғәт иттеме икән? Әҙиптәр матбуғат аша ла, һәр өйгә үткән телевидение-радио аша ла үҙ фекерен еткереп торорға тейеш. Бына шуны граждандлыҡ позицияһы тип аңлайым.

**▸ Дамир Мөлҡаман улы, бер шиғырығыҙҙа "Тик шуныһы, көтөү боролғанда, алға сыға малдың аҡһағы", тип яҙғайнығыҙ. Ни өсөн 90-сы йылдарҙа ил башҡа юлды һайлаған ваҡытта алда әҙиптәр булмай сыҡты, ни өсөн һаман булһа башҡорт әҙиптәре алдынғы сафта түгел?**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** 90-сы йылдарҙа әҙиптәр алда булды ул. Булат Рафиҡовты ғына иҫкә төшөрөү етә. Ә бөгөн әҙиптәр иһә яҙыусылар араһында әҙәби тәнҡиткә ихтыяж бар тип әйтеп булмай. Әлбиттә, уҡыусыға ул кәрәк. Уҡыусыға әҫәр оҡшай йәки оҡшамай. Ә ни өсөн оҡшағанын ул әйтә алмай. Яҡшы күренгән әҫәр ҙә бит һабын ҡыуығы булыуы ихтимал. Ә әҙәби тәнҡит бар һәм үҙ маҡсатын башҡара икән, халыҡҡа ысын мәғәнәһендә зауыҡлы әҫәрҙәр еткереләсәк, шуның менән йәмғиәт тә яңы үҫешкә күтәреләсәк.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Әҙип кеше һәр ваҡыт власҡа оппозицияла тора. Уның оппозицияла тороуы кемгәлер ҡаршы барыуҙы аңлатмай. Әҙип - власть менән халыҡ араһындағы бәйләнеште булдырыусы кеше. Власть иһә тотороҡлоҡҡа ғына түгел, торғонлоҡҡа ынтыла. Үҙ системаһын нығытыр өсөн тағы әллә күпме системалар уйлап сығара. Дөрөҫ, бөгөн беҙ граждандар йәмғиәтенән бик алыҫ

илде алып ҡарама, һәр бер илдең әҙәбиәте үҙ иленә, халҡына идеологик ҡорал булып хеҙмәт итә. Һәм үҙ халҡының мәҙәниәтен сит илдәргә таратыу маҡсатын үтәй. Америка, Европа фильмдары беҙҙең экрандарҙы баҫып алған икән, был беҙҙең идеологик яҡтан еңелә барыуыбыҙ тураһында һөйләй.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Ысынлап та, әҙәбиәт дөйөм сәнғәттән саҡ ҡына алдараҡ бара. Сәнғәттең кимәле өсөн әҙәбиәт яуаплы, тип әйтергә мөмкин. Ни өсөн 19-сы быуатта әҙәбиәт титандары тыуып, "алтын осор"ҙо барлыҡҡа килтергән, сөнки йәмғиәттең өҫкө ижади ҡатламы үҙе юғары талаптар ҡуйған. Бөгөн

## ҡабаттан йөҙ

**▸ Белеүебеҙсә, әҙәбиәттә мәғрифәтселек осоро ла булған. Бөгөн әҫәрҙәр аша нәсихәт уҡыу, нимәгәлер өндәү - үтелгән этап, тип иҫәпләйбеҙ. Әммә әле лә дидактик йүнәлештә ижад итеүселәр байтаҡ. Халыҡҡа был кәрәкме икән?**

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Һәр кем күңел талабынан сығып ижад итә. Шуға күрә мәғрифәтселек - үтелгән этап, мәғрифәтселеккә саҡырырға ярамай, тип әйтеү урынһыҙ. Тәрбиә биреү һәр заманда актуаль мәсьәлә булып тора. Тик кешене мәҙәниәтле итеү икенсе кимәлдә бара, мәғрифәтселек идеялары ла башҡа төрлөрәк.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Тәнҡит реализмы - ул күрһәтеү, ә мәғрифәтселек - өндәү. Тормошта икеһе лә талап ителгән кеүек, әҙәбиәттә лә был ике алым бер-береһенә ҡамасауламай, икеһе лә бер үк бурысты үтәй. "Аманат" журналында инде байтаҡ ҡына ваҡыт эшләйем. Редакцияға балаларҙан бик күп хаттар килә. Шуларҙың араһында шиғырҙар ҙа күп. Әммә балалар шиғырҙарында гел бер үк хаталар ҡабатлана. Ни өсөн шулай, тип уйлана башланым. Шундай һығымтаға килдем: мәктәптә балаларға һүрәт төшөрөргә, инша яҙырға өйрәтәләр, ә бына шиғыр яҙырға өйрәтмәйҙәр, хатта уҡытыусылар үҙҙәре шиғыр техникаһын белмәй. Ошо хәлде үҙгәртергә теләп, "Нисек шиғыр яҙалар?" тигән брошюра яҙҙым. Уны уҡытыусыларға таратырға ниәт бар. Кеше әллә ниндәй ауыр-ауыр фәндәр өйрәнә, әммә ябай шиғырҙың нимә ул икәнен аңлата

***Йәшәү өсөн кешегә шарттар булдырылырға тейеш. Кешегә ашарға, кейенергә, балаларын тәрбиәләргә кәрәк. Ләкин балаға, һин әле бәләкәйһең, мәктәпкә барғас, тәрбиәләрҙәр, тип әйтмәйбеҙ бит. Тормошта бөтәһе бер юлы бара. Тәүҙә матди хәлемде яҡшыртайым да, шунан һуң "Ағиҙел"де, "Киске Өфө"нө алып уҡырмын, тип әйтеп булмай. Бөгөн эшләнә торған эште иртәгәгә ҡалдырырға ярамай, бигерәк тә рухи өлкәлә. Әгәр ҙә мәлендә балаға бишек йырын йырларға ваҡыт тапмағанһың икән, бала мәктәпкә барғас, ул йырҙы йырлап ултыра алмайһың бит инде. Һәр заманда проблемалар етерлек булған. Ләкин халыҡ ул тиклем төшөнкөлөккә бирелмәгән бит. Бөгөн мал ҡарайым, иртәгә китап уҡыйым, тип йәшәмәйек. Малын да ҡара, китабын да уҡы.***

✓ *Хәҙер бит хатта тауҙарыбыҙға яҫҡыналар: Силәбе яҡлап Ирәмәлгә менеп киләләр. Башҡорт Мәккәһе булырҙай изге тауыбыҙ күкрәген ауыр техника менән иҙәләр-телгеләйҙәр. Торатауыбыҙҙы сеймал итергә ынтылалар...*

# БЕР-БЕРЕҺЕНӘ...

## менән бороһон

алмай. Әҙәбиәткә ҡыҙыҡһыныу булмауы ошонан да киләлер.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Шиғырҙы аңларға ғына өйрәтеү тураһында һүҙ йөрөтөргә кәрәк. Сөнки шиғыр яҙырға өйрәтеп булмай бит.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Һәр баланан шағир яһарға теләмәйем. Ләкин күптәр фекерҙәре булып та, шиғыр яҙыу ҡанундарын белмәү арҡаһында ижадтан төңөлә. Һан барыбер сифаттың үҙгәреүенә лә йоғонто яһай.

▸ **Бөгөн зыялыларыбыҙҙың күбеһе халыҡты рухи ҡиммәттәрҙән алыҫлашыуҙа ғәйепләй. Ә халыҡ, көндө көнгә ялғап ҡына йәшәлә, рухи донъя хаҡында уйлау ҡайғыһымы ни, тигән фекерҙә. Был бәхәстә кем хаҡлы һуң?**

**Ф.КҮЗБӘКОВ:** Әлбиттә, йәшәү өсөн кешегә шарттар булдырылырға тейеш. Кешегә ашарға, кейенергә, балаларын тәрбиәләргә кәрәк. Ләкин балаға, һин әле бәләкәйһең, мәктәпкә барғас, тәрбиәләрҙәр, тип әйтмәйбеҙ бит. Тормошта бөтәһе бер юлы бара. Тәүҙә матди хәлемде яҡшыртайым да, шунан һуң "Ағиҙел"де, "Киске Өфө"нө алып уҡырмын, тип әйтеп булмай. Бөгөн эшләнә торған эште иртәгәгә ҡалдырырға ярамай, бигерәк тә рухи өлкәлә. Әгәр ҙә мәлендә балаға бишек йырын йырларға ваҡыт тапмағанһың икән, бала мәктәпкә барғас, ул йырҙы йырлап ултыра алмайһың бит инде. Һәр заманда проблемалар етерлек булған. Ләкин халыҡ ул тиклем төшөнкөлөккә бирелмәгән бит. Бөгөн мал ҡарайым, иртәгә китап уҡыйым, тип йәшәмәйек. Малын да ҡара, китабын да уҡы.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Мин халыҡтың бөгөнгө матди хәле хөрт, тип әйтмәҫ инем. Кеше етеш, бай йәшәгән осраҡта ла рухи донъяға ынтылмай, әйтәйек, матбуғатты алдырмай. Халыҡтың гәзит-журналдарҙы алдырырлыҡ бөтә мөмкинлеге бар. Тимәк, сәбәп матди хәлдә түгел, ә рухи ҡиммәттәрҙең, шул иҫәптән матбуғаттың кимәлендә. Журналистикала ысын һөнәр эйәләре юҡ ул бөгөн. Икенсенән, һәр кешене бөтә башҡорт баҫмаларын алдырырға әйҙәү дөрөҫ түгел. Кемдер гәзит алдырмай икән, тимәк, ул уны интернеттан уҡыуы ихтимал.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Матбуғаттың кимәле түбән булыуы менән тулыһынса килешәм. Әммә халыҡтан яуаплылыҡты бөтөнләй алып ташлау ҙа дөрөҫ булмаҫ ине. Әгәр ҙә кеше гражданлыҡ бурысын аңлай, милләте тураһында уйлана икән, уҡыһа ла, уҡымаһа ла, матбуғатты ул алдырырға тейеш.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Дөрөҫ, ләкин шуны аңларға кәрәк, тотош ауыл гражданлыҡ әүҙемлеге күрһәтә алмай. Бер ауылға өс "Ағиҙел" журналы килһә, беҙҙең өсөн бөгөн ул бик яҡшы әле. Ҡыҙғаныска ҡаршы, тормош шундай талаптар ҡуя. Ҡайһы саҡта тәү ҡарашҡа йүләрерәк күренгән уйға киләм. Мәктәптә балаға әллә күпме дәрес уҡытыла, дәрестәрҙән тыш уға әллә күпме эш йөкмәтелә. Ә ни эшләп шулай уҡ мәғариф программаһына бер пункт индереп, һәр балаға, әйтәйек, мотлаҡ "Аманат" журналын алдырырға ҡушмаҫҡа? Мәктәп балаһына, был эш мотлаҡ түгел, тиһәң, ул уны бер ҡасан да башҡармаясаҡ бит.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Шуны ла онотмайыҡ, матбуғатты алдырыу, уҡыу үҙмаҡсат булырға тейеш түгел. Баҫманан алынған мәғлүмәт, белем тормошта ҡулланыу өсөн кәрәк. Шунһыҙ матбуғаттың эше бушҡа китеп бара. Был фекер дөйөм сәнғәткә лә ҡағыла. Ә кеше тормошта нимәлер ҡулланырға теләй икән, ул әйберҙең сифатлы булыуын талап итә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, бөгөн ундай талап ҡуйылмай, күптәр бөгөн, тиҙерәк көн үтһен, тип кенә йәшәгән төҫлө. Уйланып көн күрмәйбеҙ. Уйлай ғына китһәң - иҫ китерлек, уйламай ғына ғүмер итерлек, тигән бит халыҡ.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Беҙҙең система махсус рәүештә халыҡ уйланмаһын тигән нигеҙгә ҡоролған бит. Халыҡ уйлана башланымы, шунда уҡ һорауҙары тыуа башлаясаҡ.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Етәкселеккә уйланған кеше кәрәкмәй. Власть ундайҙарҙан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа. Беҙҙә һуғыш юҡ, беҙҙә тыныс, тип халыҡтың аңын баҫалар. Халыҡ күтәрелмәһен өсөн, уны ҡурҡытып көн һайын телевизорҙан ҡан ҡойош, үлтерештәр күрһәтеп торалар. Йәнәһе, күтәрелһәң, бына нисек буласаҡ.

▸ **Милли зыялылар, шул иҫәптән яҙыусылар ауылдан сыға. Тимәк, ауыл милләттең ҡото булып тора. Әммә бөгөн ауылдарға ҙур хәүеф янай. Мәктәптәр ябыла. Мәктәп ябылһа, ауыл бөтә, тибеҙ. Ләкин ата-әсәләр был мәсьәләлә бер ҡараштa түгел. Берәүҙәре балаһын ҙур ерҙә уҡытырға теләй, икенселәре, бала эргәлә булһа, уға яҡшыраҡ, ти. Барыһы ла хаҡлы кеүек...**

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Әлбиттә, һәр ата-әсә үҙ балаһына яҡшылыҡ ҡына теләй. Тимәк, етәкселәр ике ҡараштı ла күҙ уңында тотоп эш итергә тейеш. Әммә етәкселек оптимизация әмәле аҫтында йыш ҡына, насар ниәттәнме, уйламаҫтанмы, урындағы хәлде күҙ уңында тотмайынса, мәктәпте яба ла ҡуя. Проблеманы бөтөрөү шулай еңелерәк бит. Беҙ мөмкин тиклем ауылда мәктәпте һаҡлап алып ҡалыу өҫтөндә эшләргә тейешбеҙ. Сөнки беҙ ергә бәйле милләт. Ерһеҙ башҡорт үҙенең милли һыҙаттарын юғалтасаҡ. Бөгөн иһә еребеҙ ҙә ҡыҫылғандан-ҡыҫыла бара.Федоровка районында командировкала булырға тура килгәйне. Унда башҡорт ауылдары ярайһы ғына. Әммә колхоз, совхоз ерҙәрен ситтән килгән башҡа милләт вәкилдәре һатып ала башлаған. Әбйәлилдә, башҡа ҡайһы бер райондарҙа ла хәлдәр шул сама. Тик беҙҙә ошоға бәйле аныҡ ҡына мәғлүмәттәр юҡ. Хәҙер бит хатта тауҙарыбыҙға яҫҡыналар: Силәбе яҡлап Ирәмәлгә менеп киләләр. Башҡорт Мәккәһе булырҙай изге тауыбыҙ күкрәген ауыр техника менән иҙәләр-телгеләйҙәр, соңҡаһына тәре менгереп ҡаҙайҙар. Торатауыбыҙҙы сеймал итергә ынтылалар... Нимә әйтергә теләйем: ҡалала үҙебеҙҙе милләт булараҡ тулыһынса раҫлап бөтөңкөрәмәгән бер мәлдә башҡортто һутландырып торосы төп сығанаҡ — ауыл булыуын һәр ваҡыт иҫтә тотоу зарур. Ауылһыҙ ҡалыу — ерһеҙ ҡалыуға, шул сәбәпле милләтте юғалта башлауға тиң буласаҡ. Мин бының менән "Ауылға ҡайтайыҡ, ауылда йәшәйек!" тип саҡырыуҙан алыҫмын. Әммә әлеге мәлдә милләтте һаҡлау өсөн ауылды яҡларға кәрәк.

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Оптималләштереү - һуңғы йылдарҙа эшләнгән иң ҙур ахмаҡлыҡ, тип һанайым мин. Баланың ниндәй мәктәптә уҡыуы уның аң кимәленә бөтөнләй йоғонто яһамай. Заманса йыһазландырылған мәктәптә уҡыусының белеме мотлаҡ яҡшыраҡ буласаҡ, тип уйлайбыҙ икән, был ҙур хата. Сөнки ундай система баланы роботҡа әйләндерә. Был бөгөндән үк күренә башланы. Икенсенән, ябылған мәктәптәрҙән балаларҙың күбеһе интернатҡа китте. Ә интернат - ул казарма системаһы. Шул юл менән беҙ күпме баланы ерлектән айырҙыҡ. Бала йылына ике тапҡыр ғына өйөнә ҡайта. Ул ата-әсә тәрбиәһен күрмәй. Өфөлә күпме интернат! Шуларға балалар шыплап тултырылған. Улар ауылдағы уҡыусыларҙан аҡыллыраҡ, тип уйлайһығыҙмы ни? "Аманат" журналының тиражы туранан-тура оптималләштереү менән бәйле булып сыҡты. Сөнки бала интернатҡа киттеме, ул унда журнал алдыра алмай. Тимәк, өйҙән ситтә үҫкән бала күп нәмәнән мәхрүм. Иң мөһиме, ата-әсә, туғандарының йылыһын тойоп үҫмәй ул.



*Оптималләштереү - һуңғы йылдарҙа эшләнгән иң ҙур ахмаҡлыҡ, тип һанайым мин. Баланың ниндәй мәктәптә уҡыуы уның аң кимәленә бөтөнләй йоғонто яһамай. Заманса йыһазландырылған мәктәптә уҡыусының белеме мотлаҡ яҡшыраҡ буласаҡ, тип уйлайбыҙ икән, был ҙур хата. Сөнки ундай система баланы роботҡа әйләндерә. Был бөгөндән үк күренә башланы. Икенсенән, ябылған мәктәптәрҙән балаларҙың күбеһе интернатҡа китте. Ә интернат - ул казарма системаһы. Шул юл менән беҙ күпме баланы ерлектән айырҙыҡ. Бала йылына ике тапҡыр ғына өйөнә ҡайта. Ул ата-әсә тәрбиәһен күрмәй. Өфөлә күпме интернат! Шуларға балалар шыртлап тултырылған. Улар ауылдағы уҡыусыларҙан аҡыллыраҡ, тип уйлайһығыҙмы ни?*

▸ **Эскелек проблемаһы милләтебеҙҙең бер сей яраһы булып инде күпме ваҡыт уға һауығырға ирек бирмәй. Ябай халыҡ ҡына түгел, зыялыларыбыҙ ҙа бит был бәләнән азат түгел. Милли интеллигенциябыҙ эсә икән, нисек үҙ халҡын күтәрә, рухи ҡиммәттәргә саҡыра алһын?**

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Йәмғиәт бер ҡасан да бер төрлө булмай. Уның эсендә яҡшыһы ла, яманы ла буласаҡ. Шулай уҡ айыҡлыҡты, динилекте милли идея итеп күтәреү мөмкин түгел. Уның өсөн еребеҙҙе тимер ҡоршау менән уратып алырға кәрәк булыр ине.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Элек ауылда эскән кеше берәү-икәү генә булды, уларға ла эскесе, тип төртөп күрһәттеләр. Ысын граждан икәнһең, был афәтте еңеү мөмкин түгел, тип ятырға ярамай. "Айыҡ ауыл" акцияһы, айыҡ туйҙар файҙаға булһа, ни эшләп уларҙы ойоштормаҫҡа? Кеше үҙ ғүмерендә айыҡ туйҙа бер тапҡыр ғына булыуы ихтимал. Ләкин ошо уйландырырлыҡ берҙән-бер ваҡиға ла уның ғүмерен үҙгәртә ала бит. Матбуғат та, әҙәбиәт тә был өлкәлә үҙ эшен алып барырға тейеш. Әгәр ҙә әҙип, эскәндә генә мин яҡшы ижад итәм, тип үҙен аҡлай икән, әҙемтәләр ахыр сиктә барыбер ҡыҙғаныс тамамланасаҡ. Бәғзеләр үҙҙәренең етешһеҙлеген дә ниндәйҙер юғары сифат итеп күрһәтергә тырыша. Ниндәй генә шәп әҫәр яҙмаһын, эскән яҙыусы, шағир үҙ ғүмерен ҡыҫҡарта. Тимәк, халыҡты күрәләтә әҙәби мираҫынан мәхрүм итеп, үҙ миссияһын үтәй алмай.

Байрамдар ҙа, гел эске менән үткәс, бер төрлөгә әйләнеп бөттө, шикелле. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ хәҙер байрам итә беләме?

**Д. ШӘРӘФЕТДИНОВ:** Байрам итеү йолалары беҙҙә, ысынлап та, юғалды. Байрам - ул күмәк халыҡтың йыйылышып тантана итеүе, күңел асыуы. Шундай байрамдарҙан һабантуй ғына тороп ҡалды. Башҡаларын мин байрамға һанамайым. Яңы йыл, Һигеҙенсе март кеүек көндәр ғаилә байрамы тип атала. Ләкин был уйҙырма төшөнсә. Ысын байрам булһын өсөн бер генә ғаиләнең түгел, күмәк халыҡтың йыйылыуы шарт. Элек, мәҫәлән, балалар ҡарға бутҡаһы, ҡыш көнө сана шыуыуҙар ойоштора торғайны. Өлкәндәр өмәләргә барып байрам итте. Тимәк, бөгөн халыҡ ысын байрамдың нимә икәнен онотто.

**Ф. КҮЗБӘКОВ:** Һабантуй ҙа бит рәсми рәүештә генә үтә. Икенсенән, кешелә байрам кәйефе булырға тейеш. Ә бының өсөн ул тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә бурыслы. Йәғни тормоштан ҡәнәғәтләнгән өсөн байрам эшләй кеше. Ә бөгөн беҙ тормоштан ҡәнәғәтме?..

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө әңгәмәнең асылын яҙыусы менән баҡсасы тураһындағы бер хикәйәттә сағылдырып булыр ине. Бер ваҡыт баҡсасы яҙыусыға килеп: "Әҫәр тыуҙырыр өсөн һиңә бер идея бүләк итәйемме? Үҙемдең яҙыр өсөн ваҡыт та, оҫталыҡ та юҡ. Ә һин яҙһаң, шәп роман килеп сығыр ине," - тигән. Яҙыусы баҡсасы һүҙен ҙур ҡәнәғәтлек менән ҡабул иткән. Шунан: "Нисек һиңә үҙ рәхмәтемде белдерәйем икән? - тип бер аҙ уйланып торған да ҡулындағы алма киҫәген һонған. - Алма төштәрен мин барыбер ташлайым. Ә һин уларҙан йәмле баҡса үҫтерерһең". Һәр кем үҙ эше, үҙ һөнәре менән шөғөлләнергә тейеш шул...**

**Мөнир ИҠСАНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Бала уларҙы күрмәй ялбарыуын дауам итте: "Эй, Аллам! Ярҙам ит инде атайым менән әсәйемә шул яуыз араҡынан ҡотолорға, мин һинән башҡа бер нәмә лә һорамайым, хатта велосипед та кәрәкмәй миңә".*



Инде нимә эшләргә? Телевизоры ла ватылып ҡуйҙы. Шулай бәрелеп-һуғылып йөрөй торғас, кис тә етте, Илгиз кисәнән йыйылмаған урынына инеп ятты.

Иртәнсәк ул йоҡонан торғанда Гүзәл йоҡлай ине, атаһы ла, әсәһе лә өйҙә юҡ. Өйгә тәмле еҫ таралып өҫтәлдә ҡурылған картуф тора. Әҙ-мәҙ ҡапҡылап алды ла, Гүзәл янына килде.

- Тор инде, Гүзәл, сәй эсәйек.

- Эскем килмәй.

- Әсәй картуф бешергән, әйҙә, асыҡмаһыңмы ни?

- Юҡ.

Гүзәлдең тауышы хәлһеҙ генә сыҡҡас, Илгиз ҡулын маңлайына ҡуйып ҡараны. Башы уттай яна ине. Ағаһы биргән сәйҙе бер-ике йотто ла, Гүзәл кире ятты. Илгиз үҙенең юрғанын алып килеп, һеңлеһенең өҫтөнә ҡатлап япты ла, ишек алдына сығып йөрөп әйләнде. Гүзәл кире йоҡлап китте. Мәсет яғынан аҙан тауышы ишетелде.

- Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр! Әшһәду әллә илаһа иллә алла...

Элек тә ишетә ине ул аҙан ҡысҡырғандарын, ишетә лә, онота ине, ә бөгөн аҙан нисектер башҡасараҡ, күңелгә яҡыныраҡ, моңлораҡ яңғырағандай тойолдо. Шул моң уны үҙенә саҡырған, әйҙәгән кеүек булды һәм ул мәсеткә табан йүгерҙе.

Илгизде Сәғит хәҙрәт шатланып ҡаршы алды:

- Әйҙүк, Илгиз, әйҙә, тәһәрәт ал да, намаҙға баҫ.

- Ҡайҙа ул тәһәрәт? Нимә була ул? - Илгиз ян-яғына ҡараны. Хәҙрәт рәхәтләнеп көлдө лә:

- Тәһәрәт ул - намаҙ уҡыу өсөн йыуыныу, паҡланыу. Кил, әйҙә, тәүҙә өс тапҡыр ҡулдарыңды йыу, унан өс тапҡыр ауыҙыңды сайҡат, - тип тәртибе менән тәһәрәт алдырғандан һуң, үҙе менән кисәге намаҙ уҡыған урынға алып китте.

- Бына ошонда тор ҙа, беҙҙең арттан хәрәкәттәрҙе ҡабатла, эстән генә үҙеңдең теләктәреңде теләп тор. Ихлас теләктәрең ҡабул булыр, иншалла, - тип үҙе йәмәғәт алдына барып баҫты.

Тағы ла кисәге хәлдәр ҡабатланды. Хәҙрәт ағаһы ят телдә ниҙер һөйләне, шул уҡ хәрәкәттәр ҡабатланды. Илгиз дә бергилке аптыранып торғандан һуң, улар артынан өлгөрөргә тырышып, эйәрҙе. Тора-бара уға хатта был "уйын" оҡшап китте әле: йәше-ҡарты бер булып, кемуҙарҙан берсә ултырып алалар, берсә туңҡайып яталар, берсә тороп баҫалар. Кинәт Илгиздең иҫенә Хәҙрәт ағаһының "Теләктәреңде теләп тор", тигәне килеп төштө һәм ул ятһа ла, торһа ла, "Миңә велосипед кәрәк, миңә велосипед кәрәк", тип ҡабатларға тотондо. Үҙе был мөғжизәгә бик ышанып та етмәгәндәй, шулай ҙа, кем белә, ана бит, Аллаһы Тәғәлә көн дә кәнфит-перәниген килтереп биреп тора ти. Иртәгә килеүенә мәсеттә велосипед көтөп торһа, ә?! Әмирҙеке кеүек. Юҡ, унан да шәберәге! Ә унан да шәберәге буламы икән ул? Һәм ул ихласлап, "Әмирҙекенән дә яҡшыраҡ велосипед алып кил миңә, Аллаһы Тәғәлә", тип ҡабатларға тотондо һәм намаҙҙың тамамланғанын һиҙмәй ҙа ҡалды.

Сәй эсеп торманылар бөгөн, Хәҙрәт ағаһы бер ус кәнфит сығарып тотторҙо ла, ҡайтырға ҡуҙғалған халыҡ артынан эйәрҙеләр. Өйгә ҡайтышлай Сәғит хәҙрәт Илгизгә Аллаһы Тәғәләнең донъялағы бар нәмәне лә белеп-күреп тороуы, ул бөтә нәмәне лә булдыра алыуы тураһында, ихлас күңелдән һораһаң, теләктәреңдең тормошҡа ашыуы тураһында һөйләне.

- Ә мин унан бая велосипед һораным, ҡасан алып килер икән?

- Велосипед?

- Эйе.

- Эй бала, бала... Ундай ваҡтөйәк, донъя кәрәк ярағын һорайҙармы ни? Аллаһы Тәғәләнән йорт-илгә тыныслыҡ, яҡындарыңа, ата-әсәйеңә сәләмәтлек, аҡыл-тәүфиҡ һорарға кәрәк.

- Ә велосипед бирмәйме? - тине Илгиз бошоноп.




- Ул бер кемгә лә, бер нәмәне лә үҙе килтереп бирмәй, Илгиз, сәбәп ҡылырға кәрәк. Мәҫәлән, һиңә велосипед алыр өсөн атайың эшләп аҡса табырға тейеш...

Илгиздең бөтөнләй кәйефе ҡырылды, атаһы һатып алғас, ниңә уны Аллаһы Тәғәләнән һорарға? Татлы хыялы селпәрәмә килгән Илгиз күңелһеҙләнеп өйөнә боролдо.

* * *

Гүзәл инде өсөнсө көн ята. Һаташа башлағас, табиб саҡырттылар. Ул Гүзәлгә "ике яҡ үпкәһенә лә һалҡын тейгән" тигән диагноз ҡуйҙы һәм "Тиҙ ярҙам" машинаһы менән район үҙәгенә дауаханаға алып китте. Әммә медицина ярҙамы һуңлап күрһәтелеү сәбәпле, ике көн үтеүгә, Гүзәлдең үлеме тураһында хәбәр иттеләр.

Һеңлеһен ерләгәс, Илгиз үҙен донъяла бер яңғыҙы тороп ҡалғандай тойҙо. Былай ҙа боларыҡ өйҙөң ҡото китте. Атаһы менән әсәһе ҡайғынан бөтөнләй айнымаҫтан эсеүгә тотондо.

Бер көндө Илгиз Әмирҙәрҙән ҡайтып килгәндә Хәҙрәт ағаһы осраны.

- Илгиз , һин ниңә мәсетте ташланың әле?

- Гүзәл булмағас, кемгә кәнфит алып ҡайтайым?

- Мәсеткә кәнфит ашар өсөн йөрөмәйҙәр инде. Әйҙә, бараһыңмы? - Илгиз теләр-теләмәҫ кенә уның артынан эйәрҙе. Мәсеткә барып еткәнсе ул Илгизде йыуатып, кешенең йәне мәңгелек икәнлеген, Гүзәлдең ожмахта бер ниндәй мохтажлыҡ күрмәй йәшәүен аңлатырға тырышты, теге донъя, ожмах, тамуҡ тураһында һөйләне. Үлгән кешеләр өсөн аяттар уҡыһаң, доға ҡылһаң, мине онотмағандар тип шатланыр, иҫкә алыусы булмаһа, бик ҡыйғырыр, тип аңлатты. Намаҙға халыҡ йыйылғансы, Хәҙрәт ағаһы Гүзәлдең рухына аяттар бағышлап уҡып, уға матур теләктәр теләгәс, бик күңелле булды Илгизгә, нисектер, йәне тынысланып ҡалғандай тойҙо.

Шул көндән башлап аҙан тауышын ишетеү менән мәсеткә йүгерер булды Илгиз. Шулай йөрөй торғас, ҡыямға баҫыу, рөкүғҡа эйелеү, сәждәгә китеү кеүек намаҙҙа үтәлергә тейешле хәлдәрҙе еренә еткереп үтәүгә иреште, намаҙҙа уҡыла торған аят-сүрәләрҙе лә тиҙ үк ятлап алды. Мәсеткә йөрөүсе ауыл диндарҙары малайҙың ихлас күңел менән дин юлында йөрөүенә ҡыуанып, уны яратып, һәр саҡ хуплап, дәртләндерер булды. Киләсәктә уға ҙур өмөттәр бағланы. Улдарының көн дә мәсеткә йүгереүенә ата-әсәһе көлөп кенә ҡараны, аҙаҡ улар ҙа иғтибар итмәй башланы, хәйер, уларға Илгиз ҡайҙа йөрөһә лә барыбер ине.

Мәсеткә йөрөп, иманлы кешеләр менән аралашып, Аллаһы Тәғәләнең бөйөк ҡөҙрәткә эйә булыуына инанғас, ололарҙың ялынып-ялбарып теләгән теләктәрен ишетә йөрөп, Илгиз бер ҡарарға килде: Аллаһы Тәғәләнән ата-әсәһенең араҡыны ташлатыуын һорарға кәрәк! Хәҙрәт ағаһы әйтә бит, ысын күңелдән һораһаң, ярҙам итә, тип. Оҙаҡҡа һуҙмаҫҡа, иртәгә үк һорарға кәрәк!

Иртәгәһен иртәнсәк иртә менән тороп, ата-әсәһен уятмаҫҡа тырышып, шым ғына йөрөп тәһәрәт алды ла, үҙе йоҡлаған бүлмәгә инеп, ишекте ябып ҡуйҙы. Таҫтамалын намаҙлыҡ итеп йәйеп, еренә еткерергә тырышып, иртәнге намаҙҙы уҡыны. Намаҙын тамамлағас, ҡулдарын күтәреп, Аллаһы Тәғәләгә мөрәжәғәт итте:

- Эй, ҡөҙрәтле, бөйөк Алла! Зинһар өсөн атайым менән әсәйемә эсеүен ташларға ярҙам ит! Хәҙрәт ағай әйтә, һин булдыра алмаған эш юҡ, ти. Эсмәһә, улар һәйбәт кешеләр, үҙең күрәһеңдер бит...

Миңһылыу тауышҡа уянып китте. Кемдер бышылдап ҡына, әммә ярһып-ярһып һөйләгәндәй... Илгиздең бүлмәһенә яҡынлашты. Эйе, тауыш шунан килә. Әкрен генә ишекте ҡыҫып, башын тығып ҡараны ла, ауыҙын ҡулдары менән ҡаплап, өнһеҙ ҡалды. Илгиз таҫтамал өҫтөнә баҫып, ҡулдарын юғары күтәргән дә, туктауһыҙ бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлай: "Эй Аллам, атайыма, әсәйемә араҡынан ҡотолорға ярҙам ит! Һин бит бөтәһен дә беләһең, бөтәһен дә күрәһең, бөтәһен дә ишетәһең, ишет инде минең теләктәремде лә, зинһар араҡыны ташларға ярҙам ит уларға!"

Миңһылыу артына әйләнеп, уянып, урынында кирелеп-һуҙылып ултырған Илдусты ымлап ҡына янына саҡырҙы. Илдус та ишек янына килеп баҫты. Ишеккә арты менән торған бала уларҙы күрмәй ялбарыуын дауам итте: "Эй, Аллам! Ярҙам ит инде атайым менән әсәйемә шул яуыз араҡынан ҡотолорға, мин һинән башҡа бер нәмә лә һорамайым, хатта велосипед та кәрәкмәй миңә. Улар эсмәһә, һәйбәт кешеләр, араҡы эскән өсөн гонаһтарын ғәфү ит. Үҙең күрәһеңдер бит, эсһәләр, миңә ҡыйын, ҡайҙа барырға, нимә эшләргә белмәй аптырап, асығып йөрөйөм. Улар эскәс, Әмиргә минең менән уйнарға ярамай. Ҡыйын миңә..." - Илгиз ярһыуынан тауышының көсәйеп китеүен дә абайламай, ахыры.

"Эй аллам! Айыҡ сағында атайымды ла, әсәйемде лә яратам, тик иҫерһәләр, йәмһеҙ, яуыз, яман кешегә әйләнәләр.Ташлат инде шул араҡыны, зинһар!"-

Тағы ла нисегерәк ышандырырлыҡ итеп аңлатырға икән, тигәндәй, Илгиз бер мәлгә туҡтап ҡалды ла, "пажалыста" тип өҫтәне. Сөнки бер саҡ атаһына эйәреп магазинға барғайны, атаһы күпме генә ялынһа ла, һатыусы апай бурысҡа араҡы бирмәгәйне, атаһы "пажалыста" тип әйтеүе булды, бер шешәне "тып" иттереп алдына ҡуйҙы, хатта Илгизгә бер бөртөк кәнфит тә тотторҙо. Әрләүен әрләне инде, шулай ҙа бирҙе бит һорағанын.

"Йәнә бер үтенесем бар һиңә, Аллаһы Тәғәләм! - тип дауам итте Илгиз.- Гүзәлемде ҡарап ҡына йөрөт инде. Мәсеттә олатайҙар әйтә, "Сабый балалар үлгәс, ожмахта ҡош булып осоп йөрөйҙәр" ти, һин уға ҡанат-аяҡтар бир инде, ул бында атлап та йөрөй алманы, исмаһам, йүгереп-йүгереп йөрөр. Тик ул ҡошҡа әйләнһә, мин барғас, нисек һөйләшербеҙ һуң, Аллаһы Тәғәлә?.."

Ҡапыл Илдус менән Миңһылыу һөйәлеп торған ишек асылып китте, Илгиз "ялт" итеп уларға әйләнде, уның күҙҙәренән түгелеп-түгелеп йәш тама ине.

- Улым, Илгизем, - тип әсәһе уға ташланғайны, атаһы өлгөрөрәк булып сыҡты, бер ынтылыуҙа улын ҡосағына алды:

- Балаҡайым, һиңә шулай уҡ ҡыйынмы ни беҙ эскәндә? Ә? Ҙурайһаң, үҙең дә эсерһең әле.

- Мин бер ваҡытта ла эсмәйем! Араҡы эскән кешене ожмахҡа индермәйҙәр, Гүзәл бит ожмахта йәшәй, мин уны күргем килә, ныҡ һағындым Гүзәлемде, - тип һулҡылдап илап ебәрҙе малай.

Илгиздең аҙарынып-аҙарынып Хоҙайға ялбарыуынан йөрәге шартлар хәлгә етте Миңһылыуҙың. Әгәр ҙә берәйһенән ишетһә, ышанмаҫ ине алты йәшлек кенә баланың барыһын да аңлап, мәғәнәһеҙ тормошона хәсрәтләнеп, уларҙы тура юлға - иман юлына баҫтырырға маташыуын. Балаҡайғынам, нисек һыйҙырған был тиклем ауырлыҡтарҙы бәләкәй генә йөрәгенә? Ә иң ҡыйыны - ошо ғазаплы уйҙары менән уртаҡлашыр кешеһе булмауындалыр, ниңә быға тиклем бер ҙә ризаһыҙлыҡ белдермәй түҙҙе икән? Тыңламаҫтар, аңламаҫтар тип уйлағандыр инде...

- Улым, ғәфү ит беҙҙе, бынан һуң эсмәйем, балам, ауыҙыма ла алмайым, бөгөндән бына, - тип һыҡтаны Миңһылыу.

Илдус менән Миңһылыуҙы аяҙ көндө йәшен атҡандай булды. Үҙҙәренең эсеүен бала шул хәтлем дә ауыр кисерәлер тип уйлағандары ла юҡ ине әлегә тиклем. Ата-әсәһенең гонаһтарын кисереүен һорап, үҙәктәргә үтерлек итеп үтенеүе...

Вәғәҙә биреүен бирҙе лә ул Миңһылыу, әммә араҡыны ташлауы ул тиклем дә ауыр тип уйламағайны. Шешәләш әхирәттәренең ҡотортоуына, нәфсеһе ҡыҫтауына ҡаршы тороу, айһай, еңел түгел икән. Араҡынан айырылыу ғазаптарын Миңһылыу үҙе генә белә. Бер көн әхирәте Шәмсиә алып килгән "күстәнәс"тән ауыҙ итеүҙән көскә-көскә тыйылып ҡалды. Миңһылыуҙың араҡынан баш тартыуына ғәжәпләнгән Шәмсиә ҡыҫтап-ҡыҫтап та күндерә алмағас, шешәһен алып сығып китте. Шәмсиәне кире саҡырып алыуҙан үҙен саҡ-саҡ тыйып ҡалғанын аңламай шул әхирәте, әгәр шунда шешәһен асып, рюмкаға һалып алдына ҡуйһа, нәфсеһен тыя алмаҫ ине Миңһылыу. Бындай мәлдәрҙә улының йәш тулы күҙҙәрен күҙ алдына килтерә лә тыйыла. Эскеһе килеү теләген эш менән баҫты Миңһылыу, эсеүе арҡаһында ҡото киткән донъяһын баҡты. Өйөн эстән дә, тыштан да ағартты, тәҙрәләрен ялтыратып йыуҙы, йорт тирәһендәге, урамдағы ҡый үләндәрен йолҡорға Илгиз дә ярҙамлашты. Көҙ көнө ҡойма буйына емеш ағастары ултыртырға, яҙ еткәс, түтәлдәр яһап, йәшелсә сәсергә һөйләштеләр. Атаһы менән Илгиз сереп ҡыйшайған бағаналарҙы алмаштырҙы, рәшәткәләрҙе буяп та ҡуйғанда шәп булыр ине лә, буяҡ һатып алырға аҡса булмау сәбәпле, уныһын һуңға ҡалдырып торорға булдылар.

Донъяның тотҡаһы ҡатын-ҡыҙ шул, Миңһылыу эсеүҙән туҡтағас, донъялары әкренләп яйға һалынып бара, Илгиздең дә һәр саҡ кәйефе күтәренке, әле әсәһенә, әле атаһы янына килеп һырпалана, көлә-көлә хәбәрен һөйләп, ярҙам итеп йүгереп йөрөй. Атаһы унда-бында "йотҡолап" ҡайтһа ла, элеккеләй яу ҡуптармай, шым ғына инеп ятыу яғын ҡараны. Әкренләп, ул да ташлар әле эсеүен, иншалла. Эсмәй йөрөгәнен күреп, тәжрибәле сварщик булараҡ аҫҡы урамға газ үткәрешергә саҡырҙылар, эсмәҫкә тигән шартына күнеп, киләһе аҙнала эш башларға ризалашты.

Бер көн Илгиз мәсеттән ҡанатланып ҡайтып инде.

- Әсәй, әсәй, оҙаҡламай мәсеттә аят-сүрәләр уҡыу буйынса ярыш була, Хәҙрәт ағай миңә ныҡлап әҙерләнергә ҡушты, бына китаптар ҙа биреп ҡайтарҙы. Мин уҡый белмәйем бит, әсәй, һин ҡысҡырып уҡырһыңмы? Мин белгән сүрәләргә ҡушып, бына ошо аятты ятларға кәрәк, күп түгел ул, ҡыҫҡа ғына, - тип бер тынала теҙеп һалды.

- Әллә инде, улым, бер ҙә тотҡан нәмәм түгел бит әле, Хәҙрәт ағайың үҙе өйрәтһәсе...

- Ул мине генә түгел, башҡа малайҙарҙы ла өйрәтә бит, уның ваҡыты юҡ, уҡы инде, мә, - тип китабын һонһо.

- Туҡта әле, балам, мин тәүҙә бер нисә ҡат уҡып, телемде шымартайым, унан һиңә уҡып ишеттерермен, булдыра алһам, - тип китапты ҡулына алды Миңһылыу. Отҡор малай бер нисә көн эсендә әсәһе артынан ҡабатлай торғас, ятлап та алды. Ҡысҡырып уҡый-уҡый Миңһылыу үҙе лә хәтеренә һеңдерҙе.

Быны көтөп алған көн дә килеп етте. Миңһылыу ҙа Илгиз менән мәсеткә барырға булды. Малайҙар ярым түңәрәк яһап, иҙәнгә йәйелгән келәм өҫтөнә теҙелешеп ултырҙы, хәҙрәт һәм тағы бер нисә кеше уларға ҡаршы урынлашты, атаәсәләр һәм балалар стена буйына теҙелгән эскәмйәләрҙән урын алды. Ҡатнашыусылар хәтһеҙ генә, малайҙар бер-бер артлы тырышып-тырышып аят-доғалар уҡыны, араларынан берәүһе мөнәжәт һөйләне. Быны сират Илгизгә лә етте. Ул, илһамланып, эске тулҡынланыуы менән Хәҙрәт ағаһыныҡына оҡшатыңҡырап көйләп уҡыны ятлаған сүрәләрен. Улы өсөн борсолоп ултырған Миңһылыуҙы быға кисермәгән таныш булмаған тойғолар биләп алды, шатлыҡ, ғорурлыҡ хистәренән керпектәре йөшкә сылнды. Ярыш тамамланды, еңеүселәрҙе бүләкләү башланды. Мәктәптә уҡып йөрөгән малайҙар бер-бер артлы сығып бүләктәрен алды.

- Ә хәҙер ярышта ҡатнашыусылар араһында иң бәләкәй еңеүсебеҙ Илгизгә велосипед,- тине Хәҙрәт ағаһы. Илгиз үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмай аптырап ултыра бирҙе лә, һикереп тороп, хәҙрәткә табан йүгерҙе...

Бер көн мәсеттән бер бәләкәй генә китап тотоп ҡайтып инде Илгиз.

- Әсәй, бына, Хәҙрәт ағай һиңә китап бирҙе.

- Миңәме?

- Эйе, әсәйеңә бир, тине.

- "Тәүбә ҡылыу тәртиптәре", - тип уҡыны Миңһылыу китап тышындағы яҙыуҙы.

- Ә-ә-ә, әсәй, ул һиңә тәүбә ҡылһын тип биргәндер. Хәҙрәт ағай әйтә, әгәр ҙә кеше тәүбәгә килеп, Аллаһы Тәғәләнән ғәфү үтенһә, Ул уның гонаһтарын кисерә, ти, Ул хатта, ҡасан ғына тәүбәгә килер икән был кеше, тип көтөп кенә тора, ти.

- Эй-й, гонаһтарым баштан ашҡандыр инде, балам...

- Әсәй, әйҙә, Аллаһы Тәғәләнән икәүләп һорайыҡ, ул, моғайын, ғәфү итер. Хәҙрәт ағай әйтә, балаларҙың һораған теләге ҡабул була, улар гонаһһыҙ була, ти. Мин хәҙер үк теләй башлайым: "Эй ҡөҙрәтле, бөйөк Аллам! - Илгиз ҡулдарын йәйеп йөҙө алдына ҡуйҙы ла, дауам итте. - Әсәйемдең яңылышлыҡ менән ҡылған гонаһтарын кисерә күр, ул бит хәҙер араҡы эсмәй, инде бер ҡасан да эсмәйәсәк, быннан һуң тыйғандарынан тыйылып, ҡушҡандарыңды үтәп кенә йәшәр ул. Зинһар, гонаһтарын кисер инде әсәйемдең..."

- Эйе, кисер минең гонаһтарымды, сабый ғына көйө һинең барлығыңа, берлегеңә инанып йәшәгән иманлы балам хаҡына булһа ла кисер мине, Аллам, - тип бышылданы Миңһылыу.

-Әсәй, әйҙә инде икәүләп Аллаһы Тәғәләнән атайыма эсеүҙән ҡотолорға ярҙам итеүен һорайыҡ, - тине Илгиз.

Әсәһе уға баш ҡына ҡаҡты, сөнки нимәлер әйтерлек хәлдә түгел ине ул. Күҙҙәренән йәштәр аҡтылар ҙа аҡтылар. Таҙарыныу, паҡланыу, сафланыу йәштәре.

(Аҙағы. Башы 2-се һанда).

ЗАУЫҠ

# ЙЫРЛАМАҺАМ, ЙӨРӘК ЯНЫР,

## Йөрәгем ҡайнарыраҡ

Рамай ҠАҺИР

**Шағирлыҡ ул һәләт йәки һөнәр генә түгел, ә тәү сиратта кешенең характеры, күңел торошо, тигән фекер менән күптәр килешәләр. Кемделер ҡылыҡһырлағанда, уның яҙышыу-яҙышмауын күҙ уңында тотмайынса, шағир йәнле, тип тә ысҡындырабыҙ бит. Шағир йәнле - хис-тойғолары урғып торған, үҙе шаян, үҙе ярһыу, донъяны үҙ ҡуйынына һыйҙырырҙай бер хыялый ул. Шундай шәхестәрҙең береһе - Рамай Ҡаһир. Шиғриәттән үрелгән күңеле ижадында ла асыҡ сағылыш таба. Сығышы менән Учалы районының мөғжизәле тәбиғәтле Өргөн ауылынан был шағир. 1962 йылдың ғинуар айында тыуған. Тәү ҡарашҡа, һөнәре ижад менән бәйле түгел кеүек. Ул Көньяҡ Урал тимер юлының Учалы станцияһында вагондар ҡараусы - ремонтлаусы булып эшләй. Әммә эш урыны, киреһенсә, ижад ҡеүәһен үҫтерә генәләр. Сөнки шағир өсөн тимер юл, тәгәрмәстәр тыҡылдауы, бер туҡтауһыҙ ағылып торған вагондар, һыҙылып киткән алыҫ офоҡтар һәм күҙ алдында торған хозур тәбиғәт айырым мәғәнәгә эйә. Рамай Ҡаһирҙың "Төштәремдә Ҡояш күрҙем", "Сиренле йорт" йыйынтыҡтары шиғри антологияларҙа донъя күргән. Балалар өсөн "Тейен ҡунаҡ саҡырған" исемле шиғырҙар һәм йомаҡтар китабы нәшер ителгән. Ошо көндәрҙә шағирға 50 йәш тула. Уны юбилейы менән ҡотлайбыҙ һәм яңынан-яңы ижади үрҙәр теләйбеҙ.**

### Тере Салауатыбыҙ!

Бөтөн бара, имеш, тиҙәр,
Һеҙҙең башҡорт затығыҙ.
Бары таш һын ғына, тиҙәр,
Һеҙҙең Салауатығыҙ.
Алдай улар, ышанмағыҙ,
Тере Салауатыбыҙ!
Имән ағасындай ныҡлы
Беҙҙең башҡорт затыбыҙ!

Теләһәгеҙ, йөрәгемә
Мылтыҡ терәп атығыҙ!
Үҙ һүҙемде кире алмам:
Тере Салауатыбыҙ!
Беҙҙең йөрәктәрҙә йәшәй
Уның рухы, булмышы.
Ул бит тыуған еркәйемдең
Тынмаҫ һайрар бер ҡошо.

Гөрләп сәскә ата бөгөн
Башҡортостан - йортобоҙ.
Беҙҙең йөрәк түрҙәрендә
Йәшәй Салауатыбыҙ!
Теләһәгеҙ, йөрәгемә
Мылтыҡ терәп атығыҙ.
...Үлгәндә лә ҡабатлармын -
Тере Салауатыбыҙ!

### Булһаң икән...

Булһаң икән көҙҙәремдә
Балланған ал емештәй.
Их, ҡартайып үлһәм икән,
Хәлдәремдән килмәҫтәй.
Күңелкәйем булһа икән
Таҙа һәм саф инештәй.
Кеше булып ҡалһаң икән
Ауырлыҡҡа бирешмәй...
Етер инде. Ир кешегә
Хыялланыу килешмәй.
... Илле йәшкә кереп барам,
Һаман аҡыл етешмәй.

### Күктәргә менеп һайрайым

Ҡайҙа баҫып һайрайым һуң,
Әйтегеҙ, ҡайҙаныраҡ?
Ни тиһәң дә, күңел йырлай,
Йөрәгем ҡайнарыраҡ!
Ниндәй эштәр башҡарайым
Халҡыма файҙалыраҡ?
Яҡты хыялдар ҡорғанда -
Йөрәгем ҡайнарыраҡ!

Һабантурғай бул, күңелем,
Тор һәр саҡ һайрабыраҡ.
Йырламаһам - йөрәк яныр,
Йөрәгем ҡайнарыраҡ.
Йөрәккәйем, туҡтай күрмә,
Йә типмә йәйлабыраҡ.
Мәрхәмәтле һәм сабыр бул,
Бул һәр саҡ ҡайнарыраҡ.
Күктәргә менеп һайрайым,
Унда бит юғарыраҡ.
Бер туҡтауһыҙ күңел йырлай,
Йөрәгем ҡайнарыраҡ!

### Һин булғанға

Бал һаҡлаған бал ҡортондай
Йәлләмәйсә саҡ мине.
Йәшен тубына әйләнһәм
Һә тигәнсе тап мине.
Әйҙә, шартлайыҡ икәүләп,
Рәхәт бергә шартлауы.
Мөмкин түгел ғашиҡтарҙың
Берен-бере тапмауы!

Һунарсының ҡулындағы
Мылтыҡ булып ат мине.
Йә сит яҡҡа, башкиҫәргә
Һин ҡол итеп һат мине.
Мин риза төрлө яҙмышҡа,
Тик айырма һөйөүҙән.
Тормош былай ҙа ҡоролған
Бары янып-көйөүҙән...

Ҡол булһам да, ирек, тиеп
Ашҡыныр күңелкәйем.
Һин булғанға, мөхәббәтле,
Бәхетле ғүмеркәйем!

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# КҮРӘҘӘСЕ ТҮГЕЛБЕҘ...

## тик килер көндө күрергә кәрәк

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, филология фәндәре докторы, академик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы:** Яңы йылға аяҡ баҫтыҡ. Ә алда нимә булырын, ни күрәсәгебеҙҙе белмәйбеҙ. Миндә быны ошо тойғоһоң булмауы хәүефләндереп ҡуя. Бөгөн халыҡ билдәһеҙлек алдында тора, барыр юлында юғалып ҡалған һымаҡ.

Мине тағы шул һиҫкәндерә: ни эшләп йыл аҙағында ил хөкүмәте халыҡты башҡарылған эштәре менән таныштырмай? Йыл дауамында ниндәй мәсьәләләр сиселгән, ниндәй проблемаларҙы әле хәл итәһе бар - власть органдары ошо хаҡта асыҡтан-асыҡ белдерергә тейеш бит. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, былдай йола юҡ беҙҙә, сөнки дәүләт үҙ халҡы алдында бер ниндәй яуаплылыҡ та тоймай. Төбәк, урындағы етәкселәр ҙә сығыш яһап, йыл аҙағында халыҡ алдында яуап бирергә тейеш. Ни өсөн халыҡ тәшөнкөлөккә бирелә, уның өмөтө һүнә, сөнки ул ҡараңғылыҡта атлап бара, киләһе аҙымын яһағанда, ҡайҙа баҫырын белмәй. Ә был етәкселектең ҡайҙа атлап барыуыбыҙҙы әйтмәүенән, йәшереүенән килеп сыға.

Етәкселектең ауыл яҙмышы тураһында борсолоуын тоймайым. Күпме йылдар беҙҙең милли кадрҙар ауылдарҙа әҙерләнгән. Ауылдар үсешмәү арҡаһында унда мәктәптәрҙең ябылыуы башҡорт белгестәренең кәмеүенә килтерә. Хәҙер милли кадрҙарҙы ҡалаларҙа әҙерләү өҫтөнлөк итә, тип тә әйтергә була. Әммә ҡалала үҫкән йәштәр туған телен төплө белмәй. Үҙ телен белмәгәндәрҙең үҙ милләтенә мөнәсәбәттәре лә бөтөнләй икенсе төрлө була.

Халыҡтың күңелен аңлап торам, бөгөн уға үҙ һүҙен әйтеүе, фекерен белдереүе бик ауырға тура килә. Шуға күрә лә йәмәғәтселек файҙаһыҙ көрәшкә үҙ көсөн сарыф итмәүҙе хуп күрә кеүек. Ләкин гел генә ағым ыңғайына йөҙөп булмай бит. Ул осраҡта хәл ауырлаша ғына барасаҡ. Яҙмышыңа ҡул һелтәп, тыныс ятып та булмай. Беҙгә барыбер әүҙемерәк булырға, етәкселек органдары менән мөнәсәбәткә инеп торорға кәрәк. Ниндәй генә кимәлдә булмаһын. Ғөмүмән, үҙ-үҙебеҙгә ҡарата яуаплылыҡ тойғоһон үҫтерәйек, тип әйтер инем. Шул ваҡытта башҡаларҙан да яуаплылыҡ талап итә белербеҙ.

Рубриканы
Мөнир ИҠСАНОВ
алып бара.

ИНТЕРНЕТТАН



# ЯҢЫ ХУШБУЙҘЫ... йоторға кәрәк буласаҡ

■ Эрисман исемендәге Мәскәү гигиена ғилми-тикшеренеү институты белгестәре сүпте көн һайын түгеп, сүп биҙрәһен йышыраҡ йыуып торорға кәңәш итә. Был йортоғоҙҙо насар еҫтәрҙән, үңәҙ бәшмәктәренән, тараҡандарҙан ғына һаҡлап ҡалмаясаҡ, аллегияның ҡайһы бер төрҙәрен булдырмаҫҡа ярҙам итәсәк. Аҙыҡ ҡалдыҡтары бүлмә температураһында ярты сәғәттән һуң серей башлай һәм бактериялар үрсеүенә яҡшы шарттар тыуҙырыла. Ит, балыҡ, һөт аҙыҡтары азот һәм көкөрттән торған химик берләшмәләр барлыҡҡа килтерә, шуға ла уларҙан ауыр еҫ тарала. Саң һурҙырғысҡа йыйылған сүп-сарҙы ла аш-һыу биҙрәһенә ташлауҙан тыйылығыҙ, был осраҡта ундағы йорт талпандары, организм өсөн хәүефле башҡа микроорганизмдарҙан торған ваҡ ҡына саң бөртөктәре кире фатир буйлап тараласаҡ.

■ "Сәләмәт ҡала" гәзите тәүлегенә 8 сәғәт йоҡлау - йәш булып ҡалыуҙың нигеҙе, тип белдерә. Ғалимдар иҫбатлауынса, даими рәүештә йоҡо туймау организмды ваҡытынан алда ҡартайыуға дусар итә, шулай уҡ йоҡо баш мейеһе эшмәкәрлеге өсөн дә мөһим. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, төнгө йоҡоноң ҡыҫҡа булыуы организмдың үтә мөһим функцияларының боҙолоуына һәм биологик үҙгәрештәргә килтерә. Йоҡо туймау матдәләр алышыныуы, гормональ һәм эндокрин системаһы процесының боҙолоуына алып килә. Тәжрибәлә ҡатнашыусы йәш егеттәр тәүлегенә 4 сәғәт кенә йоҡлай, һөҙөмтәлә уларҙың ҡанында глюкозаның, шулай уҡ стресс гормоны - кортизол артыуы һәм гормональ балансТың үҙгәреүе күҙәтелә. Эксперименттарҙа ҡатнашыусыларға 12 сәғәт йоҡлап алырға рөхсәт бирелгәндән һуң был симптомдар юҡҡа сыға.

■ Нидерландтар дәүләтендә таблеткалы хушбуй уйлап табылған. Был капсулаларҙы ябай витаминдар кеүек ҡабул итергә кәрәк. Таблетка составына ингән хуш еҫле молекулалар ашҡаҙанда һәм эсәктәрҙә капсуланан сығып, тир менән бергә тире аша бүленеп сыға. Бындай хушбуй авторҙары раҫлауынса, хушбуйҙың еҫе индивидуаль буласаҡ, сөнки һәр кешенең тире төрлө еҫле була. Әлегә был асыш тест үтә һәм яҡын арала һатыуҙа булмаясаҡ.

■ Табиптың кейеменә һәм сәсенә һеңеп ҡалған тәмәке төтөнөнөң микроөлөшсәләре пациенттарға, мәҫәлән, астма йәки аллергия сирлеләргә насар тәьҫир итеүе бар. Шуға ла Луизиана штатының (АҠШ) Кристус-Сент-Фрэнсис-Кабрини дауаханаһында тәмәке тартыу быйылдан тыйыла. Был яңылыҡты индереүгә 2010 йылда тамамланған тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе лә булышлыҡ итә. Мәғлүмәттәргә ярашлы, үпкә яман шеше тәмәке тартыуҙан ғына барлыҡҡа килмәй. Кейеменә тәмәке төтөнө еҫе һеңгән хеҙмәттәшегеҙ менән оҙайлы ваҡыт бер бүлмәлә ултырып эшләргә мәжбүр булһағыҙ, хәүефләнергә урын бар. Никотин туҡымала оҙайлы ваҡытҡа һаҡланып ҡала һәм һауала булған азот кислотаһы быуы менән химик реакцияға инә. Һөҙөмтәлә канцероген үҙенсәлеккә эйә булған нитрозаминдар барлыҡҡа килә. 2010 йылда Филиппиндар медицина ассоцияцияһы ил территорияһындағы бөтөн дауаханаларҙа тәмәке тартыуҙы тыйғайны. 2011 йылда Ҡырым һаулыҡ һаҡлау министрлығы ла ошондай тыйыу индерҙе. Беҙҙең ил дә был тенденциянан артта ҡалмай, мәҫәлән, былтыр Краснодар крайы эш урынында медицина персоналына тәмәке тартыуҙы тыйҙы.

ӘЙҘӘГЕҘ...

**Бала саҡтың бер иртәһендә йоҡоғоҙҙан уянып, тәҙрәнән ҡарағас та бөтөн ер өҫтөн ап-аҡ ҡар ҡаплауын күреп, күңелегеҙҙе тыйып торғоһоҙ шатлыҡ биләп алғанын хәтерләйһегеҙме? Төнгә тиклем тауҙан шыуыуҙар, ҡар бәрешеп уйнауҙар, бейәләйҙәр һыуланып, шаҡылдап туңғансы урамда йөрөүҙәр һәр кемдең иҫендәлер, моғайын. Хәҙерге заман балалары, ҡыҙғанысҡа күрә, ошо бәхеттән мәхрүм ҡалып, буш ваҡытын йышыраҡ компьютер алдында үткәрә. Балаларығыҙ ҡыш миҙгеленән ҡәнәғәтлек алып өйрәнһен, тиһәгеҙ, әйҙәгеҙ, улар менән бергә урамға уйнарға сығығыҙ. Ә ниндәй уйындар уйнарға була һуң, тиһегеҙме?**

# БАЛАЛАР МЕНӘН БЕРГӘ

## ҡышҡы уйындар уйнайыҡ!



### Сана шыуыу

Тауҙан шыуыу ҡыш уйнала торған уйындарҙың иң киң таралғанылар, моғайын. Тауҙан сана менән генә түгел, әйтәйек, машина тәгәрмәсе камераһы, линолеум киҫәге, хатта ябай полиэтилен пакетҡа ултырып та шыуырға була. Шулай уҡ ҡатырға киҫәгенән үҙенсәлекле шыуыу ҡорамалы - тобогган эшләп алырға мөмкин. Бының өсөн ҙур ғына ҡатырға алып, ултырырға урын ҡалдырығыҙ һәм бер яҡ башын бер аҙ күтәреп, бала тотоноп ултырырлыҡ итеп бөгөп ҡуйығыҙ. Был үтә еңел "сана"ны тауға күтәреп менеүе лә уңайлы. Тобогган ныҡ итеп еүешләнгәс, уны яҡындағы сүп һауытына ташларға була.

### Фәрештәләр

Ҡар фәрештәләре булып уйнарға ла була. Бының өсөн балаға нисек итеп ҡарға арҡа менән ҡоларға һәм ҡулдар-аяҡтар менән осҡан кеүек хәрәкәттәр яһарға өйрәтегеҙ. Һуңынан уға фәрештә һынына зыян итмәй генә торорға ярҙам итегеҙ. Яңы ғына яуған ҡар - баланың фантазияһын үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк. Фәрештәнән тыш, ҡар өҫтөндә төрлө йәнлектәр һәм хайуандарҙың образдарын эшләп ҡарарға ла була.

### Эҙәрмән

Балалар ҡар өҫтөндә аяҡ эҙҙәрен ҡалдырып йөрөргә ярата. Был шөғөлдө тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итәм, тиһәгеҙ, махсус китаптар йәки интернет ярҙамында төрлө йәнлектәрҙең, ҡоштарҙың эҙҙәрен өйрәнегеҙ һәм балағыҙ менән урманға, паркка йүнәлегеҙ. Унда берәй эҙ табып, уның кем ҡалдырғанын асыҡлап ҡарағыҙ. Был шөғөлдө тематик шиғырҙар, тиҙәйткестәр менән байытып ебәрергә лә була. Мәҫәлән, "Ҡара ҡарға төштө ҡарға, аҡ ҡарға ҡара ҡарға" тигән тиҙәйткес баланың аҡыл ҡеүәһен үҫтерәсәк, һүҙ байлығын да арттырасаҡ.

### Ҡар кешеһе эҙҙәре

Ҡатырға һәм ҡалын бауҙан ҡар кешеһе эҙҙәрен яһап алырға була. Уларҙы аяҡ кейеме өҫтөнән кейеп, ҡар кешеһе эҙҙәрен ҡалдырып йөрөп килегеҙ.

### Эҙгә-эҙ

Балағыҙға бүреләр өйөрҙә нисек йөрөүе (эҙгә эҙ баҫып) тураһында һөйләгеҙ. Һуңынан баҫтырыш уйнарға тәҡдим итегеҙ, тик бер шарт ҡуйығыҙ: баҫтырыусы ҡасыусыны уның эҙҙәре буйынса эҙәрлекләһен.

### Ҡар сәскәләре

Тәжрибә өсөн һут эсеү өсөн тәғәйенләнгән "һаламсыҡ", һабын ҡыуығы өрөү иҙелмәһе кәрәк буласаҡ.

Болот бик түбән температурала барлыҡҡа килһә, ямғыр тамсылары урынына һыу боҫо ваҡ ҡына боҙ энәләре булып ҡуйыра, энәләр бергә йәбешә һәм ергә ҡар булып яуа. Ҡар бөртөктәре бер-береһен бер ҡасан да ҡабатламаған төрлө йондоҙсоҡ формаһындағы бәләкәй генә кристалдарҙан тора. Һәр йондоҙсоҡ бер үҙәк йәки нөктә тирәһендә симметрик урынлашҡан өс, алты, йәиһә ун ике өлөштән тора.

Беҙгә был ҡар йондоҙсоҡтары нисек барлыҡҡа килеүен күреү өсөн болотҡа менергә кәрәкмәй. Бының өсөн ныҡ һыуыҡ көндә өйҙән сығырға һәм һабын ҡыуығы өрөргә кәрәк. Шунда уҡ һыуҙың йоҡа шекәрәһендә боҙ энәләр барлыҡҡа киләсәк һәм улар күҙ алдында мөғжизәле ҡар йондоҙсоҡтары һәм сәскәләренә йыйыла башлаясаҡ.

### Ҡар бабайҙары

Ҡарҙан ҡар бабай ғына түгел, ҡарһылыу, эт, бесәй, гөбөргәйел әүәләргә мөмкин. Был ижади процесса бер нисә кеше ҡатнашһа, тағы ла күңеллерәк буласаҡ. Ҡар бабайығыҙ үтеп барыусыларҙың иғтибарын йәлеп итһен тиһәгеҙ, уларҙы матур итеп "кейендерергә" лә онотмағыҙ. Ҡарһылыуҙың башына яулыҡ бәйләргә йәки эшләпә кейҙерергә була. Бәлки, уға ялъяпҡыс кейҙереп, ағас ҡалаҡ тоттороп ҡуйырғалыр? Ҡар бабайҙың муйынына шарф бәйләү уны тағы ла һөйкөмлөрәк итәсәк. Әгәр ҙә ҡарҙа бәләкәй балалар менән уйнаһағыҙ, ҡар бабайҙарҙы ла бәләкәй итеп әүәләгеҙ, шул саҡта бала арымаясаҡ һәм ялҡмаясаҡ.

Бәләкәстәр менән гөбөргәйел әүәләп ҡарағыҙ, бының өсөн ҡарҙан гөбөргәйелдең панцирын яһарға һәм уға дүрт аяҡ, баш һәм ҡойроҡ ҡына эшләп ҡуйырға ҡала.

### Ҡар скульптуралары

Балаға ҡарҙың балсыҡ кеүек үк әүәләү материалы була алыуын һәм унан төрлө предметтар һәм йән эйәләре яһарға мөмкин икәнлеген аңлатығыҙ. Төрлө формалағы һәм ҙурлыҡтағы һауыт-һаба, пластик ҡаптар төрлө конфигурациялы формалар яһарға булышлыҡ итә. Ҡар шарҙарҙы бер-береһенә бәләкәй генә таяҡсалар менән беркетеп, ҡарышлауыҡ эшләгеҙ. Шулай уҡ скульптураларҙы бер-береһенә "ҡар елеме", йәғни, һыуға манып йәбештерергә мөмкин.

### Ҡышҡы пикник

Ҡышҡы урманға барғанда үҙегеҙ менән ҡайнар сәйле тормос һәм печенье алырға онотмағыҙ. Матур көндә асыҡ һауала табын ойоштороу балаға ғына түгел, үҙегеҙгә лә оҡшап ҡаласаҡ. Ҡарҙан өҫтәл әүәләп, һыйҙы шунда теҙергә була.

### Хазина эҙләү

Был мауыҡтырғыс уйын алдан әҙерлек талап итә. Магазиндан "хазина" һатып алырға кәрәк. "Хазина" - ул берәй тәмле әйбер, уйынсыҡ йәки сувенир. Уны һыуланмай торған ҡапҡа йәки пакетҡа һалығыҙ һәм билдәле урында ҡар аҫтына йәшерегеҙ. Уйынды урманда уйнаһағыҙ, тағы ла яҡшыраҡ. Бала һеҙҙең ярҙамығыҙ менән уны табырға тейеш.

### Әхирәт-бейәләй

Гел генә улығыҙ йәки ҡыҙығыҙ менән тышта йөрөй алмаһығыҙ, уға әхирәт-бейәләй менән уйнап торорға тәҡдим итегеҙ. Бер һыңары юғалған бейәләйҙе алып, уға йөҙ эшләгеҙ: төймәләрҙән күҙҙәр тегегеҙ, ҡыҙыл ептәрҙән ирен сигегеҙ. Хәҙер һеҙҙең бәләкәсегеҙ урамға үҙе менән яңы әхирәтен дә йөрөтәсәк һәм уға нисек уйнарға кәрәклеген өйрәтәсәк.

## Төҫлө боҙҙан шыршы уйынсыҡтары

Һыуҙы төрлө сағыу төҫтәргә буяғыҙ һәм уларҙы формаларға ҡойып, туңдырығыҙ. Һыуға матурлыҡ өсөн әфлисун киҫәктәре йәки ҡабығы, шыршы ботаҡтары, балан, мышар емештәре ҡушып туңдырһаң да була. Был уйынсыҡтар менән урмандағы йәки баҡсағыҙҙағы шыршыны биҙәй алаһығыҙ.

## Ҡар буяуҙары

Уйындарҙы төрләндереү өсөн ҡарҙы төрлө төҫтәргә буярға мөмкин. Бының өсөн ярты стакан һыуға аҙыҡ буяуҙары (пищевые красители) өҫтәгеҙ. Буяуҙы ҡарға һипһәң йәки ҡарҙы стаканға тултырһаң, төҫлө ҡар килеп сыға. Буялған ҡарҙан шарҙар, төрлө фигуралар, бәләкәй генә ҡар бабайҙары яһарға була.

Әйткәндәй, был уйын баланы төҫ гаммаларының үҙенсәлеге менән таныштырыу өсөн бик уңайлы. Бәләкәсегеҙгә ҡыҙыл һәм һары буяуҙар һалынған стакандар бирегеҙ. Уларҙы ҡарлы стаканға ҡойоп, ҡарҙы ҡалаҡ менән болғатҡандан һуң ҡыҙғылт һары төҫ килеп сыҡҡанын күргән баланың ғәжәпләнеүенең сиге булмаясаҡ. Шулай уҡ буялған һыу һәм ябай пипетка ярҙамында ҡарҙа һүрәттәр төшөрөргә мөмкин.

## Боҙ һыҡмаҡтары

Төҫлө һыуҙы төрилкәләрҙә туңдырып, килеп сыҡҡан төҫлө боҙҙарҙан һыҡмаҡ эшләргә. Фольганы берәй формаға килтереп, мәҫәлән, йөрәк формаһында боҙ туңдырырға. Аҡ ҡар өҫтөндә ҡып-ҡыҙыл йөрәктәр бигерәк матур күренәсәк. Бәләкәй формаларға һыу һалып туңдырып, кулондар ҙа яһарға була. Уларҙы тышта ғына тағып йөрөргә мөмкин булһа ла, улар балаларҙа оло шатлыҡ тойғолары уятасаҡ.

## Ҡар бәрешеү

Ҡар бәрешеп уйнау ҙа күңелде күтәреп ебәрә ала. Ҡар йомарлап бәрешеү күҙ үлсәме (глазомер) һәм координация үҫешенә лә булышлыҡ итә.

## Ҡар ҡәлғәһе

Был уйынды бар балалар ҙа ярата, бигерәк тә мәктәп йәшендәге малайҙар ҡәлғә төҙөргә әүәҫ була. Һеҙгә бары хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен өйрәтергә һәм ваҡыты-ваҡыты менән тәҙәүселәргә йылы сәй менән ҡоро бейәләйҙәр тәҡдим итеп торорға ғына ҡала.

## Лабиринттар һәм туннелдәр

Ҡар ҡалынлығы ун биш сантиметрға етһә, унда ҡар лабиринттары һәм туннелдәр төҙөргә була. Балаға лабиринттың планын төҙөргә ярҙам итегеҙ. Ул әҙер булғас, лабиринттың юлдары тайып торһон өсөн, һыу ҡойоғоҙ. Хәҙер инде был ҡоролма юлдарынан уйынсыҡтар йәки туп шыуҙырып уйнарға мөмкин.

## Көрәк менән эшләү

Әгәр ҙә хужалығығыҙҙа бәләкәй генә көрәк һаҡланһа, баланы ҡар көрәү эшенә йәлеп итә алаһығыҙ. Икәүләп биш минут эсендә ҡарҙы ниндәй тәрәнлектә ҡаҙып өлгөрөүҙә ярышырға, йәиһә эште ике яҡтан башлағанда нисә минутта осрашасаҡһығыҙ икәнен иҫәпләп сығарырға мөмкин.

**Ләйсән НАФИҠОВА әҙерләне.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Күреү тураһында

**Беҙ ике төрлө күрә алабыҙ: эске һәм тышҡы ҡараш менән. Тышҡы ҡарашта предметтарҙың образын күҙ аша ҡабул итәбеҙ. Ә эске ҡараш - ошо предметтарҙың нимәнән торғанын ҡарау һәләте ул.**

Мәҫәлән, шкафҡа ҡарағыҙ - уны асыҡ, аныҡ күрәһегеҙме? Ә хәҙер уның ишек тотҡаһы нимәнән эшләнгәнен күрергә тырышығыҙ - ҡарашығыҙҙы уйығыҙҙа ғына материалдың эсенә йүнәлтегеҙ һәм унда иғтибарығыҙҙы күпмелер ваҡытҡа тотоп тороғоҙ, материалдың структураһын күрергә тырышығыҙ (бер төрлөмө, тығыҙмы, йомшаҡмы һ.б.). Нимә күрәһегеҙ? Пресланған бысҡы онтағымы? Әллемдә күрәһегеҙме? Ҡарашығыҙҙы бер аҙ ситкә алып тороп, ҡабат шкафҡа ҡарағыҙ һәм уның эшләнгән материалының структураһын күрергә тырышығыҙ. Килеп сығамы? Күреүегеҙсә, эске күреү өсөн предметҡа күҙҙәр менән ҡарамаһаң да мөмкин.

Шулай уҡ ишек яңағының эске структураһын тикшерегеҙ: ул нимәнән эшләнгән? Материалдың ни тиклем йомшаҡ йәки тығыҙ булыуын күрергә тырышығыҙ. Уның йылылыҡ үткәреүен тойоуығыҙ ихтимал. Ниндәйҙер тимер предметтың эске структураһын ҡарағыҙ (мәҫәлән, йылылыҡ торбалары). Тәҙрә быялаларының структураһын ҡарағыҙ. Үҙегеҙ тағы ла нимәнелер һайлап алығыҙ ҙа (материал, күн, ҡағыҙ һ.б.) уның да структураһын тикшерегеҙ. Күрәһегеҙме, килеп сыға бит!

Хәҙер үҙегеҙҙең тырнаҡтарығыҙҙың, һөйәктәрегеҙҙең, мускулдарығыҙҙың, ҡан тамырҙарының структураһын ҡарағыҙ. Һеҙ барыһын да күләмдә күрәһегеҙ. Тап ошо эске күреү инде!

Эске күреү менән һеҙ аш-һыу бүлмәгеҙҙе, башҡа бүлмәләрҙе күрә алаһығыҙ. Әммә эске күреү ваҡытында бер нәмәне лә асыҡ күрә алмайһығыҙ, сөнки астраль планда предметтар аныҡ сиккә эйә түгел - улар бер аҙ "йөҙә".

Әйҙәгеҙ, тикшереп ҡарайыҡ. Келәмдәге бер нөктәнән күҙҙе алмай, оҙаҡ итеп ҡарап торайыҡ. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң келәм һелкенә башлаясаҡ (астраль күреү). Хәҙер ышандығыҙмы инде? Предметҡа күҙҙәр менән ҡараһаҡ, беҙ уларҙы асыҡ күрәбеҙ, ә эске ҡараш менән ҡарағанда асыҡлыҡ юҡ.

Саҡ ҡына күнекмәләр эшләһәгеҙ, теләһә ниндәй ағзағыҙҙы ҡарай аласаҡһығыҙ. Мәҫәлән, бауыр - уның структураһы, төҫө, дәүмәле, формаһы, күҙәнәктәрҙең, ҡан тамырҙарының торошо. Иң мөһиме - келәмдәге бер нөктәгә ҡарағандағы кеүек теклəп ҡарарға кәрәк.

Беҙҙең физик күреүебеҙ күҙ мускулдарының, ясмығының, селтәрле шекәрәнең күреү нервтарына бәйле. Күреүебеҙ яҡшы булһын өсөн нимә эшләй алабыҙ?

Дүрт ябай һәм һөҙөмтәле күнекмәне ҡарайыҡ.

Беренсе күнекмә. Барыбыҙҙың да устары мөғжизәле - дауалаусы. Уларҙы йылытығыҙ ҙа күҙҙәрегеҙҙе ҡаплағыҙ, эстән ҡараңғы булһын. Устарығыҙҙың береһе аша күҙҙәрегеҙгә энергия ебәрегеҙ, күҙ ясмығын, селтәрле шекәрәне, күреү нервыларын таҙартығыҙ, энергияны елкәгә тиклем еткерегеҙ (унда күреү үҙәге урынлашҡан) һәм артабан энергияны, кире эҙмә-эҙлектә таҙартып, икенсе усығыҙға күсерегеҙ.

Барыһын да, икенсе усығыҙҙан башлап, ҡабатлағыҙ. Шулай бер нисә тапҡыр эшләгеҙ.

Икенсе күнекмә. Устарығыҙ менән күҙҙәрегеҙҙе ҡаплағыҙ. Ҡарашығыҙҙы мөмкин тиклем өҫкә күтәрегеҙ (баш түбәһенә) һәм күҙ мускулдарығыҙҙа аҙ ғына ауыртыу барлыҡҡа килгәнсе шулай тороғоҙ. Һуңынан ҡарашығыҙҙы алға күсерегеҙ, көсөргәнештән арынығыҙ һәм мотлаҡ күҙегеҙҙе асып, йомоп алығыҙ.

Физик күҙҙәрегеҙ менән һеҙ баш түбәһенә ҡарай алмайһығыҙ, ә эфир күҙҙәрегеҙ менән ҡарау мөмкин. Йәғни эфир мускулдарын күнектерәбеҙ, ә физик мускулдар бергә-бер күсермә, шуға күрә улар ҙа һығылмалыға әйләнәсәк.

Һуңынан аҙ ғына ауыртыу булғансы, тамағығыҙға ҡарағыҙ, артабан ҡарашығыҙҙы алға күсерегеҙ, көсөргәнештән арынығыҙ һәм бер нисә тапҡыр күҙҙәрегеҙҙе асып-йомоп алығыҙ.

Аҙаҡ шундай уҡ алым менән уң яҡ ҡолағығыҙға, һуңынан һул яғына ҡарайбыҙ (көсөргәнештән арынып, күҙҙәрҙе асып-йомоп алырға онотмағыҙ). Диагональ буйынса аҫҡа-өҫкә, икенсе яҡҡа ҡарайбыҙ. Башта бер яҡҡа, аҙаҡ икенсе яҡҡа түңәрәк хәрәкәте яһайбыҙ. Әйләнеү тиҙлеген үҙгәртегеҙ, теләк булғанда, шаҡмаҡ, өсмөйөш яһарға була.

Шул уҡ ваҡытта үҙегеҙҙе күҙҙәрегеҙҙең яҡшы күреүенә көйләгеҙ. Бындай күнегеүҙәр ярҙамында 60 йәшлек ир +4 диоптрийлы күҙлеген 10 көндә сискән. Йәш егет -7 диоптрийҙан -2-гә тиклем төшөргән.

Өсөнсө күнекмә. Әгәр һеҙ күрәш (близорукий) икән, йөҡлар алдынан күҙҙәрегеҙҙәге көсөргәнеште кәметеп, ҡарашығыҙҙы алыҫ йондоҙға күсерегеҙ һәм шул торошта йоҡлағыҙ. Таңға күреүегеҙ яҡшыраҡ булыр.

Әгәр үтәгараш икәнһегеҙ (дальнозоркий), ҡарашығыҙҙы яҡындағы нәмәгә көйләп, шулай йоҡлап китергә кәрәк. Йоҡлағыҙ. Күҙҙәрегеҙҙең күреү һәләте үҙҙәре нормаға килә!

Йоҡлар алдынан күп уҡыһағыҙ, иртәнгә күреү һәләте насарая, йәғни күҙҙең мускулдары көсөргәнештә, яҡын араға фокуста ҡала һәм боҙолоуын дауам итә.

Дүртенсе күнекмә. Күҙҙәрҙе структураланған һыу менән йыуыу файҙалы. Усығыҙға тере һыу алығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе ошо һыу эсендә асып йомоғоҙ. Атай-олатайҙарыбыҙ бындай күнекмәне һәр көн иртән ҡабатлаған.

Әгәр ошо ябай күнекмәләрҙе эшләһәгеҙ, күҙҙәрегеҙ асыҡ күрә башлар, барлыҡ предметтарҙы асыҡ, аныҡ күрерһегеҙ.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Энергия аң артынан эйәрә

**Эйе, аң ҡайҙа йүнәлтелә, көслө энергия ла шунда бара. Энергия - ижади башланғыс. Ул нимәгә йүнәлтелгән, шуны булдыра. Аңды программалаусы компьютер - ул аң, ә мәғлүмәт - уйҙағы картиналар.**

Бынан күп йылдар элек Монте-Карлола ғалимдар аңдың һәләттәре һәм арауыҡта ижад итеү һәләттәрен тикшереү һөҙөмтәләре менән бүлешергә йыйылған. Улар фәндең был йүнәлешен "психотроника" тип атарға ҡарар итә. Психотрон энергия тормош энергияһы менән тығыҙ бәйле. Һеҙ психотрон энергияны ябай күнекмә ярҙамында тоя алаһығыҙ.

**Нисек психотрон энергияны тойорға?**

- Һул ҡулығыҙҙы усығыҙ уң яҡҡа ҡарап торорлоҡ итеп ҡуйығыҙ.
- Уң ҡулығыҙҙың бармаҡтарын һул ҡулығыҙҙың усына йүнәлтегеҙ, уларҙың араһы 10-12 сантиметр булырға тейеш.
- Уң ҡулығыҙҙы яй ғына, ел барлыҡҡа килмәҫлек итеп аҫҡа-өҫкә йөрөтөгөҙ.
- Һул усығыҙҙа күсеп йөрөгән сәнсеү тойорһоғоҙ. Ул психотрон энергия ярҙамында барлыҡҡа килә лә инде.

Энергияғыҙҙы ижади маҡсаттарға ла йүнәлтергә мөмкин. Әммә бының өсөн өмөт һәм ышаныс булыуы мотлаҡ. Ә хәҙер бер нисә миҫал менән танышайыҡ.

- Лифтҡа ингәс, алыҫ стена буйына ишеккә ҡарап тороғоҙ. Икенсе кеше инеп, һеҙгә арты менән баҫһа, уның елкәһенә теклəп ҡарағыҙ. Уйығыҙҙа ғына нимә барғаның күҙалларға онотмағыҙ. Бер нисә секундтан ул кеше йә елкәһен тырнар, йә боролоп ҡарар.
- Әгәр ресторанда официанттың тиҙ арала эргәгеҙгә килеүен теләһәгеҙ, уға шулай уҡ арттан теклəгеҙ һәм уның яныгыҙға килеүен күҙаллағыҙ.
- Бер нисә йыл элек бер Америка гәзите уҡыусыларына Биг-Бен сәғәттәренең эшендә тотҡарлыҡ булыуын күҙалларға тәҡдим итә. Ысынлап та, тап билдәләнгән ваҡытта сәғәт эшендә тотҡарлыҡ күҙәтелә. Психотрон энергия рухи нигеҙгә эйә һәм шуға күрә лә ул изге. Уны рухи һәм изге эштәрегеҙҙә ҡулланығыҙ.

**"Теге яҡ" менән бәйләнеште нығытыу**

"Теге яҡ"тың ыңғай энергияһы армияһы һәм Ижадсы менән бәйләнеште һеҙгә мин бирмәнем. Һеҙ һәр саҡ был бәйләнешкә эйә инегеҙ. Һеҙ уның менән бергә тыуҙығыҙ, был донъянан киткәндә лә уның менән бергә ҡаласаҡһығыҙ.

Шулай ҙа Ерҙә бер нәмә лә был бәйләнештең булыуына һәм уны файҙаланыу ҡағиҙәләренә бер генә ишара ла яһамай. Быға мәктәптәрҙә һәм университеттарҙа ла уҡытмайҙар, сиркәү-мәсеттәрҙә лә һөйләмәйҙәр. Бары тик бик асыҡ булмаған тойғолар ғына бар.

**Роберт СТОУН.**



## 23 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Право на защиту"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
17.05 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Жуков", 1-я серия
22.25 "Звезда" на час"
23.30 "Познер"
00.30 Ночные новости
00.45 "На ночь глядя"
01.40, 03.05 "Голубой гром". Боевик
03.00 Новости
03.50 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Все к лучшему", 253-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Ефросинья. Продолжение", 227-я серия
17.55 "Хозяйка моей судьбы", 16-я серия
18.55 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Семейный детектив", 1-я и 2-я серии
22.50 "Россия от первого лица"
23.35 "Майя. Пророки Апокалипсиса". Док. фильм
00.35 "Вести+"
00.55 "Профилактика"
02.05 "Невеста Зэнди"
04.00 "Чак-2"

### НТВ

05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "ППС". "Стажер", "Бытовуха". Сериал
21.30 "Зверобой-3". Криминальный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Главная дорога"
01.4 "Центр помощи "Анастасия"
02.35 "В зоне особого риска"
03.10 "Молодые и злые". Сериал
05.10 "2,5 человека". Сериал

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**10.00 "Новости недели"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 00.00 "Замандаштар"**
**11.15, 23.45 "Орнамент"**
